✓ ***Өйләнеүҙең маҡсаты - тәбиғи хәжәтте үтәү һәм Рәсүл Әкрәм әфәндебеҙ хәҙрәттәренең өммәтен күбәйтеү, донъя сәфәрендә һәр бер шатлыҡ һәм ауырлыҡтарҙы күтәрәсәк иптәш табыу, малды һәм ваҡытты исрафтан һәм шәриф динебеҙҙе зәғифләнеүҙән һаҡлау ул. Шуның өсөн бик йәш ваҡытта өйләнмәгеҙ, ваҡыты еткәс, йәшегеҙҙе уҙҙырып ебәрмәгеҙ, тәбиғәт ҡушҡан ваҡытта өйләнегеҙ.***

***РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29 НОЯБРЬ - 5 ДЕКАБРЬ - (ҠЫРПАҒАЙ - АҠЪЮЛАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№48 (622)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Артыҡ нык заманлаштырыу...**



башҡорт кейемен асылынан ситләштерә

6

**Аҡ болғар иле, йәки Оло Башҡортостан**



7

**Башҡорт китабы...**



8-9 үткән тарихты ла сағылдырһын, киләсәкте лә күҙаллатһын

**Ата балаһы**



12-13

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Толерантлыҡ - ул түҙеп, сабыр итеп йәшәүҙе аңлатһа ла, сабырлыҡты һынау - толерантлыҡмы?

***Рәшит ШӘКҮР, шағир, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, профессор:***

Толерантлыҡ - ул нигеҙҙә күп милләтле халыҡтар йәшәгән илдәр өсөн айырыуса мөһим шарт, тип ҡарарға кәрәк. Беҙҙең башҡорт халҡы элек-электән күршеһенә хөрмәт менән ҡараған, кешегә зыян итмәгән. Ошо сифат беҙҙең боронғо эпостарыбыҙҙа ла сағылыш тапҡан бит. Был, тимәк, бик боронғо дәүерҙәрҙә йәшәгән ата-бабаларыбыҙҙың толерантлығы хаҡында һөйләй. Халҡыбыҙ һәм уның батырҙары үҙ-үҙҙәрен, илен, ерен һаҡлаған, шул уҡ ваҡытта бер ҡасан да күршеләренә лә, башҡа халыҡтар ерenə лә баҫып инмәгән.

Геродоттың "плешивый аргиппейҙар" хаҡында яҙып ҡалдырғаны беҙҙең таҙлар ырыуына тап килә. Уларҙы бүтән күрше ырыуҙар изге һанаған, уларҙың кәңәшен тотҡан, уларға теймәгән. Бөгөн күршеләребеҙ, беҙҙе уратып алған халыҡтар беҙҙең һымаҡ уҡ булһа, проблемалар килеп сыҡмаҫ ине. Ләкин донъя беҙ уйлағанса ғына бармай шул... Күп ваҡыт толерантлы булмаған кешеләр араһында йәшәргә тура килә, шуға ла күршең үҙен нисек тота - яуап та бирә белергә тейешһең. Был тормошта ла, хатта фән өлкәһендә лә шулай. Әйтәйек, тарих фәнендә һинең халҡыңды кәмһетәләр йә ҡыйырһыталар икән, уға ваҡытында яуап бирә барырға кәрәк. Мәҫәлән, яңыраҡ "Киске Өфө"лә баҫылып сыҡҡан "Исемлектә нинә башҡорттар юҡ?" тигән репликаның йәмәғәтселектә етди борсолоу тыуҙырыуы хаҡында әйтеп китмәксемен. Башҡорттарҙы "Донъя халыҡтары" энциклопедияһына индермәйенсә, был китап авторҙары ҙур хата яһап ҡына ҡалмаған, ә толерантлы булыу шартын да һанға һуҡмауҙарын күрһәткән. Башҡорт йәмәғәтселегә бындай осраҡта, толерантлы булам, тип, өндәшмәй ҡалырға тейеш түгел ине, әлбиттә. Һөҙөмтәлә, был хаҡта китапты сығарған институтҡа шылтыратыуҙар, унда рәсми хат яҙып ебәреү һәйбәт өлгө булды, тип уйлайым. Сөнки, мин толерантлы, тигән кеше башҡаларҙан да шуны уҡ талап итергә хаҡлы. Шул саҡта ғына аңлашып, һыйышып, тыныс йәшәү мөмкин.

Әйтеүемсә, әлеге миҫалға оҡшаш йәмһеҙ күренештәр булып ята донъяла. Фән өлкәһендә, тигәндән, тағы бер миҫал иҫкә төшә. Мең ырыуына ҡарата ғәҙелһеҙ ҡараш үткәрергә тырышалар. Бер автор ошо хаҡта хәбәр таратып, йәнәһе, меңлеләр 16-сы быуатҡа тиклемге бер дәүерҙә нуғайҙар хакимлығы аҫтында көн күргән, тимәк, улар татарҙар тип әйтеүҙән дә тартынмай. Шунан сығып, Благовар районында, меңдәр башҡорт түгел, тигән уйҙырма килтереп сығармаҡсылар. Бының менән бер нисек тә килешеп булмай. Мин үҙем, мәҫәлән, мең ырыуы аҡһаҡалы, ырыу башлығымын. Беҙ, меңдәр, борон-борондан башҡорт халҡының төп ырыуҙарының береһе иҫәпләнәбеҙ. Үҙебеҙгә ҡарата бындай алдаҡсылыҡ менән килешә алмайбыҙ. Ғөмүмән, тарих фәнендә башҡорт халҡына ҡарата толерантлы ҡараш етешмәүе йыш осрай, шуға күрә йәмғиәтебеҙ толерантлыҡ шарттарында йәшәү өсөн асыҡтан-асыҡ тырышлыҡ һалырға тейеш. Һәр төрлө уйҙырма сығарыусылар күп булыр. Ауыҙҙы асып, һүҙ әйтә алмайынса тормайыҡ, толерантлы булайыҡ, үҙебеҙгә ҡарата ла шундай уҡ мөнәсәбәт булһын өсөн тырышайыҡ.


**(Дауамы 2-се биттә).**


*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# КҮРГӘҘМӘГӘ КИЛЕП,

## боронғо ҡаланың серҙәренә төшөн



**Баш ҡаланың "Урал" галереяһында "Өфө II" ҡаласығына арналған "Боронғо ҡаланың серҙәре" тигән күргәҙмә асылды. "Боронғо Өфө" республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы ойошторған күргәҙмәлә ҡаласыҡта табылған археологик ҡомартҡыларҙың бер өлөшө, уларҙың фотоһүрәттәре, картиналар, карталар урын алған. Килеүселәр бында тарих менән бөгөнгө көн тоташа, үткән менән беҙҙең заман йәнәш атлай икәнен ап-асыҡ тойомланы.**

Эйе, беҙҙең баш ҡалабыҙ территорияһында уникаль тарихи ҡомартҡы - "Өфө-II ҡаласығы" урынлашыуын кемдәрҙер белеп, икенселәре аңлап та бөтә алмай әле. Өсөнсөләр иһә ошо факт менән килешергә, йә иһә был боронғо ҡаланың башҡорт халҡы тарихына туранан-тура ҡағылышы булыуын танырға теләмәй аҙаплана. Әммә ярты быуат дауамында алып барылған ҡаҙыныу эштәре, табылдыҡтарҙы ныҡлап тикшереү, урта быуаттарҙа йәшәгән ғалимдарҙан ҡалған тарихи сығанаҡтарҙы өйрәнеү ошондай кешеләрҙең ҡараштарын селпәрәмә килтерә.


**(Дауамы 4-се биттә).**

✓ *Эшебеҙҙе, тормошобоҙҙо дауам итеүсе кеше тәрбиәләргә кәрәк. Һәр кем ғаиләһендә балаһына оҙон көй тыңлатып, әкиәт һөйләп ултыра алмаһа ла, балалар баҡсаһында, мәктәптә эште яҡшы ойошторорға мөмкин.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Толерантлыҡ - ул түҙеп, сабыр итеп йәшәүҙе аңлатһа ла, сабырлыҡты һынау - толерантлыҡмы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Гүзәл СИТДИҠОВА, яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре:*** Ошо арала Толерантлыҡ көнө билдәләнде бит. Толерантлыҡ, тигәс, үткән быуаттың етмешенсе йылдарында Үзбәкстанда совет власы көнө үткәргәндәр, тигән анекдот иҫкә төштө. Толерантлыҡ бер көн генә булмаһын инде ул, гел булһын. Хәйер, совет осоронда беҙҙе милләттәр араһында дуҫлыҡ, туғанлыҡ тигән өндәүҙәр менән тәрбиәләнеләр. Быға дәлил - граждандар һуғышы, Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы туғандар ҡәберлектәре. Ил һаҡлаусыларҙың ҡаны менән беркетелгән дуҫлыҡ, туғанлыҡ ине был. Бөгөн инде толерантлыҡ, йәғни, мәғәнәһе буйынса "һыйышып йәшәү" тигәнгә тәңгәл һүҙ килеп сыҡты. Һыйышып йәшәү - башҡорттоң ҡанында ул. Мин хатта башҡорттар сит милләттәргә үҙебеҙҙекеләргә ҡарағанда ла ихласыраҡ, асығыраҡ мөнәсәбәттә, тиер инем. Шуға ла бит башҡа милләттекеләр беҙҙең араға күпләп килеп һыйынған, һыйына тора. Тупаҫыраҡ яңғыраһа ла, халҡыбыҙ әйтмешләй, "ыштанһыҙлыҡ" дәрәжәһенә лә барып еткеләйбеҙ. Эйе, арт һаныңа кейгән һуңғы кейемен дә һалып бирергә тора беҙҙең халыҡ. Тик быны дөрөҫ аңлайҙармы икән, көсһөҙлөк, ҡыйыуһыҙлыҡ тип ҡабул итмәйҙәрме? Толерантлыҡ һүҙен башҡортсаға түҙемлек тип тәржемә итеү ҙә бар. Нисек тәржемә итер инегеҙ, тигән һорауыма интернетта "сабырлыҡ", "татыулыҡ" тигән варианттар ҙа әйтелде. Был башҡорттоң асылын йәнә бер күрһәтеп тора. Юҡ, һыйышыу тимәй беҙҙең халыҡ, түҙемлек, сабырлыҡ, татыулыҡ, ти. Йырҙағыса, йәшәйбеҙ беҙ сабыр итә-итә... Халҡыбыҙҙың бер мәҡәле иҫкә төшә: "Йомшаҡ булһаң - баҫырҙар, уҫал булһаң - аҫырҙар, урта булһаң - ил ағаһы яһарҙар". Урта була белеү ҙә бик кәрәктер ул милләткә.

***Фәрғәт МӘРҘӘНШИН, уҡытыусы:*** Интернеттан Рәсәй ғалимдарының "толерантлыҡ" һүҙенең мәғәнәһе хаҡында бәхәсләшеүҙәрен уҡырға тура килде, һәм миңә был мәсьәләгә мөнәсәбәттең бер төрлө генә булмауы аңлашылды. Тәү ҡарашҡа ябай ғына тойолған был төшөнсәне төрлөсә тылҡыусылар бар икән. Ысынлап та, мин үҙем дә ошо хаҡта уйланып, баш ватып йөрөй инем. "Толерантлыҡ" һүҙенең "түҙеү", "түҙемлек күрһәтеү" (терпимость) тигән тәржемәһе яманлыҡ ҡылыу, хаяһыҙлыҡ, эгоизм кеүек һәм башҡа шундай кире күренештәргә түҙергә саҡырыу, хатта мәжбүрләү, кеше иркен сикләү һымаҡ яңғырауы миңә лә оҡшаңҡырамай ине, ләкин тормошобоҙҙа, асылда, ул шулайыраҡ килеп сыға ла. Мәҫәлән, күп милләтле Башҡортостаныбыҙҙа йәшәп тә, уның икмәген ашап та, ашаған табағына төкөрөүселәр юҡмы ни арабыҙҙа? Башҡорт тигән һүҙҙе генә күреп ҡалһа ла ошо милләткә ҡағылышы булған бөтөн нәмәне юҡҡа сығарырға, мыҫҡылларға, яйы сыҡҡан һайын төрттөрөргә әҙер тороусы "түҙеп торғоһоҙҙар"-ҙың кем икәнлектәрен яҙып тормаһам да билдәле. Бәхеткә, күп түгел ундайҙар, ләкин бөтә ғүмерҙәре балға дегет бутап үтә меҫкенкәйҙәрҙең - шуныһы ҡыҙғаныс, уларҙың башҡа эштәре юҡтыр, күрәһең. Беҙгә түҙемлекте биргән инде Хоҙай, түҙәбеҙ. Дөрөҫөрәге, һәр сәңкелдәгәнгә иғтибар итмәйбеҙ - каруан алға барһын, әйҙә. Ләкин әйтергә теләгәнем икенсе: "толерантлыҡ" һүҙен, бәлки, "бер-береңә ихтирам" тип алыу кәрәктер? Тап шул етешмәй түгелме Ерҙә? Мәскәү ғалимы В. Сторчактың, бөтөн бәлә - тәржемәлә, тигәне менән ризалашмай ҙа булмайҙыр, бер яҡтан. Юғиһә, ысынлап та, һеҙҙең һорауҙағыса, берәү - игәй, икенсеһе - түҙә, килеп сыға бит.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыйып ҡалған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАЛАЛАРЫБЫҘҒА...

## оҙон көйҙәребеҙҙе тыңларға өйрәтәйек!

**Вәкил ХАЖИН, педагогика фәндәре кандидаты:** Заманалар үҙгәреп тора, әгәр ҙә бөгөн ауырыраҡ икән, иртәгә яҡшырып китергә мөмкин. Ниндәй генә шарттарҙа ла, иң мөһиме, милләттәштәрем туған телебеҙҙе һәм мәҙәниәтебеҙҙе онотмаһын ине. Юғиһә, ҡайһы берҙә: "Эй, беҙ йырлайбыҙ ҙа бейейбеҙ генә, ҡалған әллә нимәләр менән шөғөлләнмәйбеҙ", - тигән һүҙҙәр ишетергә тура килә. Ана шул йырлап, бейеү ҙә халыҡты халыҡ иткән, уны һаҡлаусы ҙур көс ул. Донъя ҡиммәттәре, иҡтисад һәм сәйәсәт һәр ваҡыт үҙгәреп тороусан, көнбайыштағы халыҡтар тап шулай 20-30 йыл һайын яңы шауҡымға эйәреп, ел иҫкән ыңғайға йәшәй, улар өсөн иң мөһим нәмәләр - аҡсаға, байлыҡҡа ҡарата мөнәсәбәттәре генә үҙгәрешһеҙ ҡала. Башҡорттарға ла, көнбайыш кешеләре кеүек мал, байлыҡ туплағыҙ, етеш йәшәгеҙ, тип кәңәш бирергә мөмкин. Әммә был беҙҙе милләт булараҡ юғалыуға илтә торған юл, сөнки һәр бер байыған башҡорттоң ғаиләһендә башҡорт теленә ҡарата мөнәсәбәт үҙгәрә һәм беҙҙең мәҙәниәт төп урынды биләмәй. Әгәр ҙә беҙ шулай башҡа көнбайыш кешеләре кеүек бай йәшәй башлаһаҡ, улар араһына инеп, ирип, иҙелеп йотолоуға бер аҙым була.

Башҡорт ярлы йәшәргә тейеш, тимәйем, беҙ бер ҡасан да ярлы йәшәмәгәнбеҙ, илдә аслыҡ булғанда ла Башҡортостанда бирешмәгәндәр. Ләкин иғтибарыбыҙҙы көнсығыш илдәренә, Япония, Тибет халыҡтарына йүнәлтергә кәрәк. Улар ҡиммәтле йорт йыһаздарын, затлы кейем-һалымдарҙы юғары баһаламай, рухи байлыҡты өҫтөн ҡуя. Ундағы һәр халыҡ үҙе тыуҙырған әкиәттәрҙе, эпостарҙы, йырҙарҙы, бейеүҙәрҙе белә, меңәр йыл һаҡлап килә. Беҙ ҙә балаларыбыҙға үҙебеҙҙең башҡорт халыҡ әкиәттәрен һөйләп, оҙон көйҙәрҙе күңелдәренә һеңдереп, башҡорт бейеүҙәрен өйрәтеп үҫтерергә тейешбеҙ. Бала саҡтан нимә күреп, нимә ишетеп үҫә, кешегә шул яҡын тойола. Мәҫәлән, беҙҙән бөгөн русса һәм ҡытайса йырҙың ҡайыныһы һиңә яҡыныраҡ, тип һораһалар, рус йырын һайлаясаҡбыҙ. Сөнки беҙ русса йырҙарҙы даими тыңлап үҫкәнбеҙ. Ә ҡытайса йырҙы һирәк ишеткәс, генетик яҡтан ул моң яҡыныраҡ булһа ла, ятһынып тыңламайбыҙ. Бөгөн йәштәр ҙә оҙон башҡорт көйҙәрен тап шул бәләкәйҙән ишетеп үҫмәгәнгә, ятһынып, тыңламай, уларҙа "был минеке" тигән тойғо юҡ. Бөгөн беҙҙең балалар 24 сәғәт дауамында барабан тауышын тыңлап йөрөй. Ә бит ул тауыш башҡорттарҙа түгел, хатта урыҫтарҙа ла булмаған. Һуғышҡа, һунарға барыр алдынан зомбилаштырып, ҡурҡыу тойғоһонан азат итер өсөн барабан һуғылған. Хәҙер шуны көнөтөнө тыңлап, зомбилашып йөрөгән йәштәрҙең ҡулына автомат тотторһаң, атып йыҡмаҫ, тимә. Шуға күрә, Башҡортостанда үткәрелгән төрлө мәҙәни саралар-ҙың, йыр-моң, бейеү ярыштарының йоғонтоһо тик ыңғай ғына, тип уйлайым. Рухи байлығыбыҙҙы киләсәк быуынға тапшырыу, мәҙәниәтебеҙгә, сәнғәтебеҙгә, телебеҙгә ҡарата ихтирам, һөйөү тойғоһо уятыуҙа әһәмиәте ҙур.

Эшебеҙҙе, тормошобоҙҙо дауам итеүсе кеше тәрбиәләргә, киләсәгебеҙҙе ҡайғыртырға кәрәк. Һәр кем ғаиләһендә балаһына оҙон көй тыңлатып, әкиәт һөйләп ултыра алмаһа ла, балалар баҡсаһында, мәктәптә эште яҡшы ойошторорға мөмкин. Мәктәптә тәнәфес һайын башҡорт көйөн яңғыратып ҡуйғанда, дәрес ваҡытында талғын ғына ҡурай моңон фон итеп ҡуйғанда ла баш ял итер, күңелдәге ҡаршылыҡ юҡҡа сығыр, ҡолаҡ өйрәнер ине. Ауыҙ-тел ижады, оҙон көйҙәр, йолаларыбыҙ - башҡорт халҡын һаҡлай торған ҡалҡан, шуны юғалтмаҫҡа кәрәк.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле бара. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

● Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн **50665** индекслы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тин**гә яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән **50673** индекслыһының хаҡы - **543 һум 72 тин**.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **252 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **252 һум**.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов рәсми сәфәр менән Италияла булды һәм Миланда республиканың иҡтисади һәм инвестиция потенциалы презентацияһын уҙғарҙы. Презентациянан һуң Рөстәм Хәмитов Италияның эшлекле даирәһе менән осрашыу уҙғарҙы. Машина эшләү, еңел сәнәғәт, медицина өлкәләрендә уртаҡ предприятиелар төҙөү итальяндар менән эш алып барыуҙа өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең береһе булыуы ихтимал. Атап әйткәндә, "CAMOZZI" компанияһы етәкселеге менән осрашыуҙа станоктар эшләү өлкәһендә хеҙмәттәшлек перспективалары тикшерелде. "ESAOTE" компанияһы вәкилдәре менән осрашҡанда Башҡортостанда медицина ҡорамалдары етештереү мәсьәләләре ҡаралды.

✓Италия Башҡортостандың биш иң эре тышҡы сауҙа уҙаҡташы исемлегенә инә. 2013 йылда тышҡы сауҙа әйләнеше 1,2 миллиард доллар тәшкил иткән, өҫтәүенә был сумманың 90 проценттан ашыуы экспорт поставкаларына тура килә. Республиканың Италияға поставкалаған төп тауарҙары иҫәбендә нефть һәм нефть продукттары. Республикаға машина эшләү, химия һәм металлургия сәнәғәте продукциялары индерелә. Италияның Башҡортостан иҡтисадында туплаған инвестициялар күләме 2013 йыл аҙағына 1,9 миллион доллар тәшкил иткән, 13 уртаҡ предприятие эшләй.

✓Рөстәм Хәмитов Башҡортостанда "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалын булдырыу тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Был маҡтау билдәһе менән Башҡортостан Республикаһына дан килтергән балалар тәрбиәләгән ата-әсәләр, шулай уҡ өс йәки унан күберәк инвалид бала йә иһә алты һәм унан күберәк етем бала һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалыусы балаларҙы балалыҡҡа алыусылар бүләкләнәсәк. "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы менән бүләкләгәндә ата-әсәләргә (уллыҡҡа алғандарға, опекундарға, ҡарап үҫтереүселәргә) 100 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата бүләк түләнә.

✓Рөстәм Хәмитов Рәсәй Президентының Башҡортостан Республикаһындағы ҡабул итеү бүлмәһендә граждандарҙы ҡабул итте. Сәғәт ярымлыҡ аралашыу барышында республика етәксеһенә бер нисә ҡала һәм район халҡы мөрәжәғәт итте. Бөрйән районынан Нәсимә Наурыҙбаева Байназар дауаханаһын япмау һәм уның артабанғы эшләүенә булышлыҡ итеү үтенесе менән, Өфөнөң Затон бисtәһендә йәшәүсе Ольга Першина Ә.Исҡужин исемендәге 9-сы балалар музыка мәктәбе өсөн яңы бина төҙөү мәсьәләһен хәл итеү үтенесе менән мөрәжәғәт итте.

***✔ Һинең телмәрең - һинең кемлегеңде күрһәтеп торған көҙгө ул. Рухи ярлылыкты ғына кеше нормаға һыймаған лексика менән тултыра, тупаҫ һүҙҙәр, һүгенеүҙәр ярҙамында аралаша.***



КИЛЕШМӘЙЕМ!

# МАТУР ТЕЛМӘР ҘӘ...

## мәҙәнилек билдәһе




**Мәҙәниәт йылында республикабыҙҙа бик күп саралар үтте. Һис шикһеҙ, уларҙың һәр береһен яратып ҡабул иттек, сәнғәт әһелдәренең талантына һоҡландыҡ. Тик был йылда беҙ бер нәмәгә иғтибар бүлергә онотток, шикелле. Мәҙәниәт усаҡтарына йөрөү генә һинең мәҙәнилегең күрһәткесе түгел әле. Һүҙем һәр кешенең эске рухи мәҙәниәтенең айырылғыһыҙ өлөшө булған телмәребеҙ тураһында.**

Беҙ йәшәгән йәмғиәттә телмәр мәҙәниәте проблемаһы ҙур урын алып тора. Телебеҙҙе йәмләмәй торған лексика уҡыусылар ауыҙынан да, ололарҙан да, мәктәптә, телевизор экрандарынан, хатта китап, журналдарҙан да "яуа". Ғаилән менән берәй матур фильм ҡарарға тип ултырһаң, телевизорҙан ишеткән һүҙҙәр өсөн балаларың алдында оятҡа ҡалаһың. Яҙыусылар ҙа китаптарында күренештәрҙе, хәрәкәттәрҙе, төрлө әйберҙәрҙе тәбиғи асылы менән генә атап яҙа. Йәш быуын матур әҙәбиәттән дә өлгө ала алмағас, уларға нисек кенә үпкәләйһең инде?

Телмәрҙә оятһыҙ һүҙҙәр ҡулланыу бер кешенән икенсеһенә тиҙ генә йоғоп барыусан. Кеше һүгенеү һүҙен башлап ишеткәндә тәүҙә ҡыҙарһа, аҙаҡтан үҙе лә берике һүҙ әйтеп ебәрә, һуңынан һәр икенсе һүҙе насарға әйләнә. Элек бындай лексиканы йәмғиәттең иң түбән ҡатламын тәшкил иткән енәйәтселәр, эскеселәр, төрмәнән сыҡҡандар ғына ҡуллана, хәҙерге ваҡытта ундай һүҙҙәр бөтөн ҡатлам кешеләренең телмәрендә лә осрай. "Ижтимағи фекер" фонды мәғлүмәттәре буйынса, беҙҙең илдәге бөтөн кешенең 70 проценты телмәрендә нормаға һыймаған лексика ҡуллана, тик 30 процент ҡына телмәр мәҙәниәтенең ҡанундарын хәтерендә тотоп йәшәй икән. Беҙҙең халыҡ бер ҡасан да һүгенеү һүҙе ҡулланмаған, хатта ауыр һүҙҙе лә һирәк әйткән тип беләбеҙ. Шуға ла был һандар беҙҙең милләтебеҙгә артыҡ ҡағылмайҙыр, тип ышанғым килә.

Хәтерегеҙҙә булһа, элегерәк СССР-ҙың енәйәт кодексы буйынса, йәмәғәт урындарында оятһыҙ һүҙ әйткәндәрҙе 15 тәүлеккә биклəп ҡуя инеләр. Бәлки, ниндәйҙер штрафтар, яуаплылыҡҡа тарттырыу ҡаралһа, әҙмәүерҙәй ирҙәр, тәмәке тартып тороусы ҡыҙҡыҙҡындар, йәш кенә балалар уйлап һөйләшергә өйрәнер ине. Матур телмәр, һис шикһеҙ, тәрбиәлелек, мәҙәнилек, башҡаларға ихтирам менән ҡарай белеү билдәһе. Әллә ғаиләләрҙә ошондай тәрбиә эше һүлпәнәйә төштөмө икән был йәһәттән, тип тә уйланыла.

Белгегеҙ килһә, аралашҡанда һүгенеү һүҙҙәре ҡулланыу һаулыҡ өсөн дә зарарлы. Үҙең һүгенеп һөйләшмәһәң дә, башҡаларҙан насар һүҙҙәр ишетеү генә лә кеше сәләмәтлегенә зыян килтерә ала. Ғаиләлә әр һүҙҙәре гел яңғырап тора икән, унда үҫкән балалар аҡыл һәм физик йәһәттән бик көсһөҙ була. Олатай, өләсәйҙәребеҙҙең оҙон ғүмерле булыуы уларҙың әхлаҡлы, матур тормош алып барыуы менән дә бәйле. Белорет районы Бирҙегол ауылында йәшәгән Байдәүләт олатайым - 80, Мәрғүбә өләсәйем 108 йәшкә тиклем йәшәне, йәндәре йәннәттә булһын. Уларҙың ауыҙынан бер ҡасан да һүгенеү һүҙе ишеткәнем булманы. Хатта ҡосаҡлап индергән утынды мейес алдына яңылыштан шатыр-шотор итеп тө-шөрөп ебәрһән, өләсәйем: "Иплəп, фәрештәләреңде ҡурҡытаһың бит", - тип әйтер ине. Насар һүҙҙәр ҡулланған әҙәмдән кеше генә түгел, фәрештәләр ҙә ҡаса, һине яҡлаусы, ҡурсалаусы ҡанатың булмаясаҡ. Шуның өсөн дә матур һөйләшергә, матур аралашырға ғүмер буйына өйрәнергә кәрәк.

Һинең телмәрең - һинең кемлегеңде күрһәтеп торған көҙгө ул. Кеше ни тиклем белемлерәк, мәҙәнилеге юғары булһа, уның телмәре лә шул тиклем матурыраҡ була. Рухи ярлылыкты ғына кеше нормаға һыймаған лексика менән тултыра, тупаҫ һүҙҙәр, һүгенеүҙәр ярҙамында аралаша.

Һүҙҙең ҡеүәте шул тиклем көслө, уның ярҙамында кешене үлтерергә лә, терелтергә лә мөмкин. Мәҙәниәт йылы тамамланып килә, ләкин мәҙәнилек кешегә ғүмер буйы кәрәк.

**Әлфиә ЗӘБДИНОВА.**

# "ҺЫУ БУЙЫНДА ҺЫУҺАНЫМ"...

## ошолай буламы икән?




**Дуҫыбыҙ, халҡыбыҙҙың абруйлы улдарының береһен юбилейы менән ҡотларға булдыҡ. Алған бүләк янына, ғәҙәттә, открытка яҙып һалыу ғәҙәте бар бит. Киттек ҡатыным менән открытка һайларға.**

Матур-матур открыткаларға уны нәшер итеүселәр хатта ҡотлау тексын да яҙып ҡуйған, әттәгенәһе! Бәлки, яҡшылыр ҙа был, тик дуҫыбыҙға беҙ кемдендер дежур һүҙҙәрен түгел, ә үҙебеҙҙең йөрәктән сыҡҡан йылы тойғоларыбыҙҙы белдергебеҙ килгәйне бит... Етмәһә, бөтә текстар ҙа рус телендә. Ғүмер буйы үҙ телебеҙҙә аралашып, серләшеп йөрөгән кешендә, өҫтәүенә, халҡыбыҙҙың илһөйәр үә телһөйәр улын нисек итеп сит телдә ҡотламаҡ кәрәк! Был бит әсә телебеҙҙе һанламауға, дуҫыбыҙҙы ихтирам итмәүгә бәрәбәр! Аптырағас, эргәләге "Планета" китап магазинына индек, тик бында инде беҙгә... татарса ҡотлау яҙылған открытка тәҡдим иттеләр. Яңыраҡ З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтенең фирма магазинында ла шундайыраҡ хәлгә ҡалғайныҡ, тик беҙ унда башҡортса яңы йырҙар яҙмалары эҙләп барып индек. Китап магазины булһа ла, шуныһы һәйбәт: унда һәр төрлө сувенир тауарҙар, шул иҫәптән, эстрада һәм халыҡ йырмоңдары яҙмалары ла һатыла. Үкенескә күрә, унда беҙ бер нисә башҡорт йырсыһының элекке яҙмаларынан башҡа диск күрмәнек. Уның ҡарауы, "Татар жырлары", "Татарча солянка", "Мунча ташы" һәм башҡа шундай продукция тулып ята. Туҡтағыҙ, иптәштәр, беҙ ҡайҙа йәшәйбеҙ һуң әле? Нинә мин үҙемдең тыуған Башҡортостанымда башҡортса китаптар, открыткалар, Маҡтау ҡағыҙҙары, йыр-моңдарыбыҙ яҙылған дискылар эҙләп йөрөргә, уларға зар-интизар булырға тейешмен? "Һыу буйында һыуһап" йөрөү әллә ошолай буламы?

**Байым ЙӘҒӘФӘРОВ, хеҙмәт ветераны.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ДӘРЕСТӘ ФАЙҘАЛАНАМ

**Ҡайһы саҡ мин кешеләрҙе гәзит уҡыусылар һәм бөтөнләй уҡымаусыларға бүлеп ҡарайым. Бына шунда бер ниндәй артыҡ һүҙҙәр һөйләмәйенсә лә бик яҡшы ҡылыҡһырлана кеше.**




Ваҡытлы матбуғат баҫмаларын электән алдырып, ил-йорт хәлдәре менән хәбәрҙар кеше, ғәҙәттә, зирәк, ҡыҙыҡһыныусан, оптимист, йәш күңелле булып сыға. Күршем Ғәлиә апай Аҫылбаеваны тап ана шундай булғаны өсөн яҡын күрәм дә инде. Ире Әшрәф ағай менән икеһе лә хаҡлы ялдалар. Көн оҙоно йорт эштәре менән булышып, мал-тыуар аҫыраргә тура килһә лә, гәзит уҡырға ла ваҡыт таба улар. Район гәзите, "Киске Өфө", "Йәшлек" гәзиттәрен, "Ағиҙел","Башҡортостан ҡыҙы" журналдарын алдыралар. Үҙем дә "Киске Өфө"нө яратып уҡыйым, шуға ла Ғәлиә апай менән осрашһаҡ, ошо хакта һөйләшеп, һүҙ бөтмәй. Кисә йомошҡа ингәнемдә үткән һандарҙың береһендә Бөрйән районынан ҡорама оҫтаһы Рәшиҙә Ғиззәтуллина тураһында баҫылып сыҡҡан мәҡәлә тураһында һөйләшеп киттек. Әйткәндәй, минең дә бер-ике ҡорама юрған бар, шуны күреп ҡалды ул. "Бала саҡтан оҡшай миңә шул шөғөл, тик тотоноп китә генә алмайым," - ти апайым. Ҡышҡы оҙон кистәрҙә бергәләп ултырып, ҡорама һырырға вәғәҙәмде алғас ҡына сығып китте.

Ошо йәһәттән "Киске Өфө"лә боронғо кәсеп, шөғөлдәрҙең тергеҙелеүе хаҡында даими рәүештә материалдар бирелеүен бик хуплайым һәм рәхмәтлемен редакцияға. Уҡытыусы булараҡ, мин был гәзитте дәрестәремдә йыш файҙаланам. Балаларға туған телебеҙ, тарихыбыҙ, йолаларыбыҙ тураһында һөйләгәндә, "Киске Өфө" бына тигән ҡулланма ролен үтәй минең өсөн. Унан тағы "Белмәһәң - бел" рубрикаһынан да дәрестәрем өсөн файҙалы мәғлүмәттәр алам. Ә бына 41-се һандағы "Башҡортлоҡ - ул оло яуаплылыҡ" тигән диалог буйынса класс сәғәте үткәрҙек. Уҡыусыларҙың был материалды тын да алмай тыңлап ултырыуы, аҙаҡ фекер алышыуҙарҙа бәхәсләшеп китеүҙәре уларҙың был темаға битараф булмауын күрһәтеп кенә ҡалманы, ә ҡайһы бер борсоулы мәсьәләләрҙе лә асып һалды. Шуныһын да әйтәйем: ошо класс сәғәтенән һуң журналистика факультетына йыйынған бер нисә уҡыусым почтаға барып, киләһе йылға "Киске Өфө"гә яҙылып ҡайтты.

**Айһылыу ИШМЫРҘИНА, тарих уҡытыусыһы. Дәүләкән районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары пленар ултырышта "Башҡортостан Республикаһы Башлығы тураһында"ғы закон проектын ҡараны. Закон проекты республиканың иң юғары вазифалы кешеһенең исемен үҙгәртеү менән бәйле һәм Башҡортостан Республикаһы Башлығы эшмәкәрлегенең хоҡуҡи нигеҙҙәрен һәм хоҡуҡ гарантияларын билдәләй. Депутаттар проекты беренсе уҡыуҙа ҡабул итте.

✔Салауат Харрасов Башҡортостандың Контроль-иҫәп палатаһы рәйесе итеп һайланды. Ҡарар берҙәм тауыш менән БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 14-се ултырышында ҡабул ителде.

✔Өфөлә "4-се бала табыу йорто - Дим - "Миловка паркы" тигән 254-се автобус маршруты барлыҡҡа килде. Әлегә автобустар һуңғы туҡталыш булған Романовка һәм Мармылев ауылдарына тиклем генә бара. "Миловка паркы" торлаҡ комплексы төҙәлеп бөткәс, автобустарҙың хәрәкәте яңы биҫтәгә тиклем оҙайтыласаҡ.

✔"Башҡортостан халыҡтарының йолалары һәм кәсептәре: үткәне, хәҙергеһе һәм киләсәге" республика күргәҙмә-фестивале Өфөлә 3 декабрҙә уҙасаҡ. Республика балалар (үҫмерҙәр) техник ижад үҙәгенә Башҡортостандың 11 ҡалаһынан һәм 23 районынан еңеүселәр һәм призерҙар киләсәк. Фестиваль Өфө ҡалаһы, Киров урамы, 43 адресы буйынса иртәнге сәғәт 10-да башлана.

✔Башҡортостан Республикаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһында "Йылдың иң яҡшы башҡорт китабы" конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Конкурста республика районлары һәм ҡалаларынан 120-нән ашыу эш (видеоролик) ҡатнашты. 19 район һәм ҡаланан 29 китапханасы, өс тележурналист һәм бер уҡыусы еңеүсе тип иғлан ителде, уларға бүләк сертификаттары тапшырылды.

✔Республиканың Мәҙәниәт министрлығы билдәле башҡорт артисы Бәҙәр Йосопова бюсына иң яҡшы проектҡа конкурс иғлан итте. Асыҡ конкурсҡа ҡатнашыуға бөтә профессиональ скульпторҙар саҡырыла. Аҡ граниттан бюст Пушкин урамы, 94 адресы буйынса Бәҙәр Йосопова исемендәге Актерҙар йорто эргәһендәге биләмәлә ҡуйыласаҡ. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 284-42-47.

**"Башинформ"дан.**

**✓ Бөгөнгө көндә ҡаласыҡта табылған артефакттарҙың күп өлөшө Башҡорт дәүләт университетында һаҡлана. Киләсәктә улар тулыһынса беҙҙең музейға биреләсәк. Киләһе йылда музейҙың бинаһы проектына конкурс үткәреләсәк.**



ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...



# КҮРГӘҘМӘГӘ КИЛЕП,

## боронғо ҡаланың серҙәренә төшөн

**(Башы 1-се биттә).**

Киң йәмәғәтселеккә "Өфө-II ҡаласығы" исеме аҫтында билдәле булған тарихи ҡомартҡы баш ҡаланың үҙәгендә, Пушкин, Зәки Вәлиди, Салауат Юлаев проспекты киҫешкән урында урынлашҡан. Урта быуат картографтары XIV-XVI быуаттарҙа уҡ был урында Паскерти (Башкирд, Башҡорт) тип аталған ҡала булыуы тураһында мәғлүмәт ҡалдырған. Башҡорт ҡалаһын Каталон атласында һәм Меркатор картаһында табырға була. Археологтар билдәләүенсә, ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламы 4 метрға етә. Илленсе йылдарҙан башланған ҡаҙыныу эштәре алып барылған осорҙа тарихи әһәмиәткә эйә булған миллиондан ашыу экспонат табылған. Улар араһында ҡиммәтле, төҫлө, ҡара металдан, һөйәктән, быяланан, балсыҡтан эшләнгән төрлө әйберҙәр, импорт һауыт-һаба, сит яҡтарҙан килтерелгән башҡа төрлө әйберҙәр ҙә осрай. Һуңғылары Башҡорт ҡалаһының Урта Азия, Кавказ, башҡа төбәктәр менән әүҙем рәүештә сауҙа итеүе тураһында һөйләй. Мәҫәлән, быяланан һәм ярым ҡиммәтле металдарҙан эшләнгән әйберҙәр Византия империяһының Сүриә ерҙәренән һәм Балтика буйынан килтерелгән булһа кәрәк. Иртә урта быуатҡа ҡараған алтын, көмөш, бронза биҙәүестәр, кейем деталдәре йыш осрай. Шулай уҡ иртә Византия, Алтын Урҙа дәүеренә ҡараған аҡсалар ҙа бар. Әлбиттә, урта быуаттарҙа арыу уҡ үҫешкән ҡаланың һанһыҙ ҡомартҡыларын бер күргәҙмәгә һыйҙырып булмай, шуға күрә лә ошо сикһеҙ байлыҡтың бәләкәй генә өлөшө тыуған төбәк тарихына битараф булмағандарҙың хөкөмөнә сығарылды.

- Тарих менән ҡыҙыҡһыныусылар күп, күргәҙмәгә килеүселәр ҙә күп булыр тип ышанабыҙ, - тип һөйләне күргәҙмәне асҡанда "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығы директоры Гәүһәр Тимерхан ҡыҙы Батталова. - Был беҙҙең беренсе күргәҙмә, декабрь айында икенсе күргәҙмәне ойоштороrға ниәтләйбеҙ. Әле фотоһүрәттәргә өҫтөнлөк бирҙек, ҡаласыҡта табылған әйберҙәрҙең төп нөсхәләре сикле күләмдә күрһәтеләсәк. Шулай уҡ ҡаланың ниндәй булыуын, уның тормошон күҙ алдына килтерергә тырышҡан рәссамдарҙың реконструкцион йәки фараз картиналары урын алды. Беҙ әлеге ваҡытта ҙур эштәр алдында торабыҙ. Бөгөнгө көндә ҡаласыҡта табылған артефакттарҙың күп өлөшө Башҡорт дәүләт университетында һаҡлана. Киләсәктә улар тулыһынса беҙҙең музейға биреләсәк. Киләһе йылда музейҙың бинаһы проектына конкурс үткәреләсәк, техник, проект-смета документтары эшләнәсәк. Барыһы ла яҡшы булһа, 2016 йылда музейҙың бинаһын төҙөү башланасаҡ, тип уйлайбыҙ...

Әлеге ваҡытта буласаҡ музейҙың эске торошо ниндәй буласағы хаҡында яҡынса күҙаллауҙар бар. Директор ярҙамсыһы Фаяз Арыҫланов "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығы "Боронғо Өфө"нөң виртуаль туры менән таныштырып, былай тине:

- Беҙҙән йыш ҡына археолегик музей, уның яныңдағы территориялар нисек урынлашасаҡ, тип һорайҙар. Музей Пушкин, Зәки Вәлиди, Яңы күпер урамдары киҫешкән ерҙә, йәғни боронғо ҡала булған урында төҙөләсәк. Әлеге ваҡытта тикшерелмәгән урындарға зыян килмәйәсәк, музей территорияһы был урындарға таралмаясаҡ. "Боронғо Өфө" Башҡортостандың иң заманса музейы буласаҡ. Әүҙем рәүештә яңы технологиялар ҡулланыласаҡ. Музейҙа күрһәтелгән экспонаттар ҙа тик кенә тормясаҡ, мәҫәлән, бейеклеге 4 метрға еткән мамонттар ҙа, керамик һауыт-һабаны эшләгән оҫта ла хәрәкәттә буласаҡ. Әлеге ваҡытта беҙ буласаҡ музей буйынса виртуаль тур эшләнек. Унда музейҙың эстәлеген яҡынса күҙ алдына килтерергә була. Виртуаль тур тулыһынса эшкәртелеп бөткәндән һуң музей сайтына ҡуйыласаҡ. Әлбиттә, һуңынан уға үҙгәрештәр индереләсәк, камиллашасаҡ...

Шулай итеп, тарихи хәҡиҡәтте ҡабул иткән, тарихҡа битараф булмағандарҙы күргәҙмәне ҡарарға саҡырабыҙ. Күргәҙмә бары тик бер аҙна дауамында ғына барасаҡ.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҒАЛИМӘЛӘРҘЕҢ ФИҘАҠӘРЛЕК ӨЛГӨҺӨ



**Ошо көндәрҙә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында "Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының актуаль проблемалары" тип исемләнгән XIV Бөтә Рәсәй кәңәшмәһе үтте. Сарала Башҡортостандан, Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡаҙан, Новосибирск, Пермь ҡалаларынан ғалимдар, республиканың юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары, аспиранттар һәм студенттар, шулай уҡ республиканың төрлө төбәктәренән тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары ҡатнашты.**
**Был конференция бер нисә йыл рәттән уҙғарылып, традицияға әүерелә бара. 2012 йылдағы конференция - билдәле тел белгесе Нәжибә Мәксүтоваға, 2013 йылдағыһы - венгр ғалимы Йожеф Торма иҫтәлектәренә бағышланһа, быйылғыһы - күренекле башҡорт тел белгесе, филология фәндәре докторы Сәриә Миржанова һәм башҡорт тел белгесе, лексиколог, филология фәндәре кандидаты Нәсимә Суфиянова исемдәре менән бәйле булды.**

Кәңәшмәнең тәүге өлөшөндә С.Миржанова менән Н.Суфиянованың тормошона, фәнни эшмәкәрлегенә байҡау яһалһа, артабан иһә "Төрки халыҡтары диалектологияһының актуаль проблемалары", "Тел ғилеменең дөйөм мәсьәләләре, уларға яҡын тороусы дисциплиналар" тип исемләнгән ике секция һәм ике симпозиум эшләне. Кәңәшмә күтәрелгән темаға туранан-тура бәйле булған үҙенсәлекле сығыштарҙан башланып китте. Сәриә Миржанованың яҡташтары - Әбйәлил районы Рәхмәт ауылынан килеп еткән ағинәйҙәр театрлаштырылған тамаша күрһәтте: улар үҙҙәре ижад иткән шиғырҙарын уҡыны, халыҡ йырҙарын башҡарҙы, бейене. Кәңәшмәне ойоштороусы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисаметдинова билдәләүенсә, сараға был ағинәйҙәрҙе саҡырыу башҡорт теленең Көнсығыш диалектының Күбәләк һөйләше менән яҡындан танышыу мөмкинлеге бирҙе. Әлбиттә, кәңәшмәлә ҡатнашыусылар ағинәйҙәрҙең әҙәби тел нормаларын яҡшы белеүенә лә иғтибар итмәй ҡалманы. Нәсимә Суфиянованың яҡташы - Күгәрсен районынан килгән уҡытыусы Ғәлиә Әлимғужинаның ғалимә тураһында һөйләгән иҫтәлектәре иһә башҡорт теленең Көньяҡ диалектының Эйек-Һаҡмар һөйләшендә барҙы. Шулай уҡ башҡорт теленең Көнсығыш диалектында аралашыусы Ҡурған өлкәһе Сафакүл районынан килгән Яңы ҡатай ырыуы вәкилдәре лә үҙ сығыштарында диалект һүҙҙәрен ҡулланып, уларҙы әҙәби телдәге варианттары менән сағыштырып, сараға йәм өҫтәне. Артабан иһә һүҙҙе ғалим-ғалимәләр дауам итте, иҫтәлектәре менән уртаҡлашты.

- Сәриә Миржанова тураһында һөйләгәндә, тәү сиратта, уның материалдарының яҙып алыныу сифатының яҡшы булыуы тураһында телгә алыу мотлаҡтыр, - тине филология фәндәре докторы, профессор Фәнүзә Нәҙершина. - Ғалимәнең материал йыйыу методикаһын хәҙерге йәштәр өйрәнһен ине, тип бик теләйем. Уның архивындағы тексттарҙан күренеүенсә, текст мәғлүмәт биреүсе нисек һөйләгән - шул килеш яҙып алынған. Һәр экспедицияға ныҡлап әҙерләнеп сығыуы арҡаһында ғалимә үҙен борсоған һәр проблемаға яуап таба алған. Уның эске тойомлауы, телде белеүе, телде яратыуы ла быға ярҙам иткәндер, тип уйлайым...

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Остазыбыҙ Вәкил Исмәғил улы Хажин беҙгә: "Мин башҡорт!", тип, һөрәнләп, күкрәп һуғып йөрөмәгеҙ. Ул һөрәнләүегеҙҙән халҡыбыҙға бер файҙа ла булмаҫ. Уға хеҙмәт итергә тәләйһегеҙ икән - уның рухи байлығын әҙләгеҙ ҙә, таратығыҙ", - тигәйне. Булып үткән кәңәшмәлә беҙ ошондай бурысты атҡарған ике ғалимәбеҙ тураһында яҡынданыраҡ белдек.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Калинин районы Беренсе май урамы, 35 адресы буйынса балалар һәм үҫмерҙәр өсөн яңы ял итеү урыны - "Sin(a)" тигән ғәҙәти булмаған атама менән антикафе асыласаҡ. Былай йорт ғәҙәти кафе, ресторандарға һәм төнгө клубтарға альтернатива булып торасаҡ - бында тәмәке лә тартмайҙар, алкоголе эсемлектәр ҙә эсмәйҙәр. Ҡунаҡтар өсөн спорт уйындары, төрлө конкурстар, ижади, интеллектуаль һәм спорт бәйгеләре, бейеүҙәр, ҡыҙыҡлы кешеләр менән осрашыуҙар ойоштороласаҡ.

✓Үзбәкстандың баш ҡалаһы Ташкентта Башҡортостан Республикаһы көнөн байрам итеүгә арналған Башҡорт мәҙәниәте көндәре үтте. Республика сәнғәтен Башҡорт дәүләт филармонияһы артистары - йырсылар Римма Аманғилдина һәм Вәхит Хызыров, ҡурайсы Азат Биксурин, бейеүсе Ильяс Ҡарабулатов күрһәтте. Башҡорт әҙәбиәте вәкилдәренән сарала "Башҡортостан" гәзите журналисы, шағир Лариса Абдуллина ҡатнашты.

✓Сочиҙа үткән бөтә "ТЭФИ- төбәк 2014" Бөтә Рәсәй телевизион конкурсының йомғаҡлау этабында БСТ-ның биш проекты финалға сыҡты. Еңеүселәр араһында оператор Урал Ғатауллин, "Тамыр"ҙың "Герой балалар" (авторы Ләйсән Мәзитова) тапшырыуы ла бар.

✓3 декабрҙә бөтә илдә үтәсәк инша яҙыу буйынса йомғаҡлау имтиханын Башҡортостанда 21 мең сығарылыш уҡыусыһы яҙасаҡ. Насар билдә алған уҡыусылар иншаны киләһе йыл 4 февралдә һәм 6 майҙа ҡабаттан яҙа аласаҡ.

✓1 декабрь Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында билдәле рок-музыкант, башҡорт эстрадаһы легендаһы, "Дәрүишхан" төркөмө лидеры Дим Мәннәндең иҫтәлегенә арналған "Һуҡмаҡһыҙ юлсы" тип аталған фильмдың презентацияһы үтә. Документаль фильмдың авторҙары - "Тамыр" телеканалының ижади төркөмө. Уның режиссеры - Ләйсән Мәзитова. Сарала "Дәрүишхан"дың йырҙарын "Нектория", "Бүреләр", "Арғымаҡ" төркөмдәре һәм "Дарман" шоу-проекты башҡарасаҡ. Актерҙар Шәһит Хамматов менән Рәмзил Сәлмәнов Дим Мәннәндең шиғырҙарын уҡыясаҡ.

✓30 ноябрҙә Конгресс-холл бинаһында "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбленең концерты була. Яңы программа Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арнала. 18 сәғәттә башлана.

КӨН ҠАҘАҒЫ

# ҺАУ БУЛ, G20 - 2014!

## Һаумы G19 - 2015?

**Ағымдағы йылдың ноябрե бөтә донъя масштабындағы осрашыуҙарға бай булды, ләкин улар араһында Австралияның Брисбен ҡалаһында уҙған G20 саммиты айырыуса хәтерҙә ҡалды. Йыл һайын иҡтисадтары үҫешкән һәм үҫешә барыусы илдәрҙең етәкселәрен йыйған был форумда донъялағы төрлө актуаль проблемалар һәм көнүҙәк мәсьәләләр хаҡында фекер алышыуҙар, һөйләшеүҙәр үткәрелә һәм ҡарарҙар ҡабул ителә. Быйылғы саммитты уҙған йылдағыларҙан айырып торған төп һыҙаттар - серлелек һәм Рәсәйгә ҡарата дошмандарса мөнәсәбәт.**

Брисбендағы форумда ҡатнашыусыларҙың теге йәки был мәсьәлә буйынса ниндәй ҡарарға килеүен аңлауы ауыр. Улай ғына түгел, аңлауы бөтөнләй мөмкин түгел, тиһәң дә хата булмаҫ, сөнки күбеһенсә ябыҡ ишек артында үткән һөйләшеүҙәрҙең йөкмәткеһе йәмғиәт өсөн сер булып ҡалды. Шуға күрә һәр сараны анализлап барған эксперттарға был юлы һөйләшеүҙәрҙе түгел, ә имеш-мимештәрҙе, фараз итеүҙәрҙе, саммитҡа йыйылған ил башлыҡтарының фотоға төшеүҙәре, уларҙың ым-ишаралары, күрешкәндәге һүҙҙәре, коала менән ҡосаҡлашыуҙарҙы һәм кем кемдең түшенә йәбешеүе хаҡында ғына фекер алышырға насип булды. Рәсми сығыштарҙа ла ил башлыҡтары төп темаларға бөтөнләй ҡағылманы йәки дежур һүҙҙәр менән генә ҡотолдо. Шулай ҙа бөгөн донъялағы хәл-ваҡиғаларҙан сығып, саммит ваҡытында формаль булмаған осрашыуҙарҙа ниндәй темалар күтәрелеүе хаҡында күҙалларға була, улар - инвестициялар, санкциялар, нефтҡә хаҡтар һәм, әлбиттә, Украина.

Ә рәсәйҙәрҙә саммит ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы? Ул Көнбайыштың Рәсәйгә ҡарата булған ырҡа кире ҡарашын асыҡ һәм ҡаты итеп асып һалды. Владимир Путинға адресланған дошмандарса ишара был мөнәсәбәттең бар йәһәттән дә - иҡтисади яҡтан да, Украиналағы хәл-ваҡиғалар буйынса ла - аҙаҡҡаса барасағы хаҡында аныҡ күрһәтте. Брисбендағы был форум барышына ҡарап, шуны аңларға мөмкин булды: әлеге ваҡытта донъяла бер ниндәй ҙә G20 юҡ, ә G7 үҙәкле һәм командалығы Вашингтонда булған көнбайыш илдәренең һәм сәйәси башлыҡ ролендә Рәсәй торған БРИКС үҙәкле көнбайыш булмаған эре илдәрҙең ҡапма-ҡаршы ике лагеры ғына бар. Ҡалған илдәр, хатта нефтҡә бай ғәрәп илдәре лә, әлегә нейтраллек һаҡлаусы һәм ҡайһы яҡҡа өҫтөнлөк бирергә белмәгән өсөнсө көстә барлыҡҡа килтерә. Шулай ҙа бөгөнгө көндә уларҙың долларға бәйле булыуын онотоорға ярамай, тимәк, көстәрҙең бер яҡҡа һыҡ ауышып китеү мөмкинлеге лә ҙур.

Ике яҡ араһындағы һынылыш былтыр Рәсәйҙә үткән саммит ваҡытында уҡ асыҡ сағылды. Ләкин беҙҙә ул ваҡытта көнбайыш бөтә донъя лидерлыҡ дилбегәһен үҙ ҡулында ғына тоторға тырышыу маҡсатынан баш тартыр, тигән өмөт ыш-ныс йәшәй ине әле. Тик Украиналағы ваҡиғаларҙан һәм ағымдағы йылда Рәсәйгә ҡарата алып барылған иҡтисади һөжүмдән һуң был турала һүҙ йөрөтөү урынһыҙ. Ошондай шарттарҙа саммиттың дейөм ултырышы алдынан БРИКС илдәренең осрашыуы мөһим һәм кәрәк сара булды. Ә Ҡытай, Рәсәй, Һиндостан, Бразилия һәм ЮАР лидерҙарының ҡулға-ҡул тотоноп түңәрәк буйлап тороп фотоға төшөүҙәре уларҙың, бер ниндәй ҡыҫымға ҡарамайынса, Рәсәй менән бергә булыуҙарын күрһәтеүсе ишара итеп ҡабул ителде. Тимәк, шул уҡ Пекинда йәки Делиҙа әлеге ваҡытта Рәсәйҙе генә түбәнһетмәүҙәрен, ә бөтөн донъяны бер кәртәгә бикләргә һәм бары тик үҙ ҡағиҙәләренә генә ярашлы йәшәтергә теләүҙәрен яҡшы аңлайҙар. Әгәр ҙә Рәсәйгә көстәре етеп, уның рухын һындырыуға өлгәшһәләр, сират артабан уларға етәсәк. Был - факт. Тимәк, бергә һәм берҙәм булыу бик кәрәк. Ул һәр кемдең мәнфәғәтендә. Шуға күрә был илдәрҙең артабан бөтә яҡлап та хеҙмәттәшлек итәрен нығытып, бер-береһенә терәк булып, ҡаҡшамаҫ һәм ҡеүәтле союз барлыҡҡа килтереүҙәрен көтөргә кәрәктер. Ә кемгәләр был оҡшамай икән - уларҙың проблемаһы. Улар әле булһа Рәсәйҙең барыһы ла тибеп-тәртәргә хоҡуҡлы булған өнһеҙ бокс грушаһы түгеллеген төшөнә алмай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быйылғы саммит, яҡшымы-насармы, үтеп китте. Киләһе йылда форум рәйеслеге Төркиәгә күсә. Бар донъя "Һау бул G20 - 2014!" тип хушлашты, ләкин икенсе йыл саммит ошо уҡ составта йыйылырмы, әллә йәмәғәтселек Рәсәй ҡатнашмаған форумды "Һаумы G19 - 2015" тип сәләмләрме? Әйтеүе ауыр.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА**
**әҙерләне.**

ЙӨҘӨН КҮРЕП, ЙӨҘ ОЯЛМАҺЫН

# ДӨРӨҪ ЯҘЫЛМАҺА...

## төҙәтә йөрөйөк

**Өфө ҡалаһында, республикабыҙҙа төрлө географик, административ атамаларҙың башҡортса варианттарында киткән хаталар тураһында гәзит биттәрендә йыш телгә алына.**




Ошо арала мин дә шундай ҙур бер хатаға юлыҡтым. "Дәүләт цирҡы" туҡталышына ҙур, матур итеп яны яҙыу ҡуйғандар, тик яҙыуҙың дөрөҫлөгөн тикшермәгәндәр. "Дәүләт цирҡы туҡталышы" тигән һүҙҙә бер түгел, өс хата киткән. "Дәүләт цырҡы туктальшы" тип яҙылған. Хатаны үҙ ваҡытында төҙәтмәһәк, бәлки, аҙаҡ ошо хаталы яҙыуға ҡарап төҙөлгән документтарҙы, башҡа алтаҡталарҙы ла төҙәтергә тура килмәгәйе, тим.

**Фаил ТИКИЕВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МЫЛТЫҠЛЫҒА ИШЕК АСЫҠ

**Рәсәйлеләргә үҙҙәре менән ҡорал алып йөрөргә рөхсәт ителде. Уны милкеңде һәм һаулығыңды һаҡлау өсөн ҡулланырға мөмкин буласаҡ. Ил Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев Хөкүмәттең 814-се һанлы "Рәсәй биләмәһендә граждандарҙың ҡоралына һәм уға патрондарҙың әйләнешен көйләү тураһында"ғы ҡарарға үҙгәрештәр индергән документҡа ҡул ҡуйҙы.**

Быға тиклем һаҡланыу маҡсатында граждандар үҙҙәре менән тик травматик пистолет һәм револьвер алып йөрөү хоҡуғына эйә булһалар, хәҙер 12-се калибрлы шыма көбәкле һәм ҡыҫҡа көбәкле мылтыҡ (нырлы карабиндан тыш) менән дә урамға сығырға мөмкин. Әлбиттә, был барыһы ла хәҙер урамда мылтыҡ менән йөрөй ала, тигән һүҙ түгел. Бындай хоҡуҡҡа ҡоралды һаҡлауға һәм алып йөрөүгә тейешле рөхсәт ҡағыҙы булғандар ғына эйә.

Ҡоралды һаҡлау һәм ҡулланыу хәүефһеҙлегенә үҙгәрештәр ҡағылмай. Ҡоралды урамға мотлаҡ яһаҡһыҙ (неразряженный) рәүештә һәм махсус көптә генә алып сығырға мөмкин. Шулай уҡ ҡорал хужаһы айыҡ булырға тейеш. Хәрби патрондар менән ҡоролған мылтыҡтан торлаҡ йорттар һәм учреждениелар эргәһендә атыу тыйыла. Мылтыҡ менән шулай уҡ митинг, тантаналы йөрөшкә, пикетҡа һәм башҡа халыҡ күп йыйылған сараларға барыу ҙа рөхсәт ителмәй. Ҡоралды кешегә мәғариф учреждениеларына, магазин һәм төнгө клубтарға ла юл ябыҡ. Шулай уҡ мылтыҡ эйәһе ҡоралды бер-нисә минутҡа ғына ла машинала ҡалдыра алмаясаҡ, сөнки иғтибарһыҙ һаҡлаған һәм юғалтҡан өсөн ике йылға тиклем төрмәгә эләгергә мөмкин.

Законға ярашлы, хәҙер юридик шәхестәр һаҡ аҫтында бер юлы 20 мең патрон һәм 20-гә тиклем көбәк күсерә ала. Ә граждандарға үҙҙәре менән меңгә тиклем патрон алып йөрөргә мөмкин буласаҡ. Үҙгәрештәр сит ил граждандарына ла ҡағыла. Улар үҙҙәре менән алып килгән ҡоралды тирҙа һаҡлау менән бер рәттән, ваҡытлыса лицензия нигеҙендә Рәсәйҙә лә ҡорал һатып алырға һәм уның менән ил биләмәһендә элекке кеүек 5 түгел, ә 10 тәүлек ҡалырға хоҡуҡлылар. Ҡоралдар коллекцияһы хужаларына ла юлдар киңәйҙе - хәҙер яңы ҡорал һатып алыу өсөн Мәҙәниәт министрлығы менән килешеү кәрәкмәй, ә ни бары Эске эштәр министрлығына ғариза биреү ҙә етә.

# ҺЫРА ҺАТЫУ КӘМЕЙӘСӘК

**Рәсәйҙә 2016 йылдан пластик һауыттарҙа сығарылған спиртлы эсемлектәр һатыуға сығарылмаясаҡ. Был хаҡта Дәүләт Думаһы депутаты Валерий Трапезников белдерҙе.**

Уның фекеренсә, был аҙым илдә спиртлы эсемлектәрҙе эсеүҙе кәметеүгә булышлыҡ итәсәк, сөнки пластик һауыттарҙа, күп осраҡта, арзан һыралар һатыла. Ә был, үҙ сиратында, уны һәр кемгә һатып алырға мөмкинлек бирә. Шуға күрә октябрҙә коммунистар партияһы депутаты Николай Коломейцев Дәүләт Думаһына индергән аҙ спиртлы эсемлектәрҙе пластик һауыттарҙа тулыһынса тыйыуҙы күҙаллаған закон проекты күпселек депутаттар тарафынан яҡлау табып, беренсе уҡыуҙы уңышлы үтте. Закон проекты ҡабул ителгән осраҡта күләме 0,5 литрҙан артмаған пластик һауытҡа алкоголе 4 проценттан юғары булмаған спиртлы эсемлек кенә ҡойоп һатырға мөмкин буласаҡ.

Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, әлеге ваҡытта егеттәрҙең 33 проценты, ә ҡыҙҙарҙың 20 проценты көн һайын спиртлы эсемлектәр, башлыса һыра ҡуллана. Һуңғы 15 йылда Рәсәйҙә һыра эшләү дүрт тапҡырға артҡан.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Быуындан тоҙҙо сығарыу

❖ Ярты стакан һыуға 1 ҡалаҡ аш тоҙон, ҡара икмәктең йомшағын һалырға, болғап, бутҡа хәленә килтерергә. Шуны төнгөләккә быуынға һыларға, целлофан ябырға ла, яулыҡ менән бәйләргә. Аш тоҙо быуындарҙа ултырған тоҙҙо сығарырға һәләтле.

❖ Аҡ балсыҡты йылы һыуҙа шыйыҡ бутҡа хәленә килгәнсе иҙергә лә быуынға бәйләргә. Аҡ балсыҡ быуындағы тоҙҙо ла, һары һыуҙы ла һурып ала.

❖ Быуындар һыҙлаһа, тоҙ ултырһа, артрит, остеохондроз интектерһә, абаға япраҡтарын сепрәктән тегелгән тоҡҡа һаларға һәм шуның өҫтөндә йоҡларға кәрәк.

### Йүткергәндә

❖ Ҡәһүә тартҡысҡа эре тоҙҙо тартырға һәм ҡапҡасын асып, унан сыҡҡан "саң"ды тәрән итеп һуларға кәрәк. Йүткереү баҫылғансы көнө буйы бер нисә тапҡыр эшләргә кәрәк.

### Ҡан тамырҙары, нервылар өсөн

❖ 1 ҡалаҡ әлморондо 1 стакан һыуға һалып, 10 минут ҡайнатырға, 1 тәүлек төнәтергә. Төнәтмәне көнө буйы 1-2 стакан эсергә.

### Холецистит

❖ Гөлйемеш сәскәләрен 15-20 минут дауамында сәй кеүек бешерергә һәм көнөнә 4 тапҡыр ярты стакан эсергә.

### Лимон

❖ Лимон - организмға зәләкән вирустарҙы юҡҡа сығарыусы тәбиғи сара. Шуға ла сөгөлдөр һәм лимон һуттары ҡушылмаһын йышыраҡ эсергә.

❖ Витаминлы эсемлек яһау өсөн 4 стакан ылыҫҡа (шыршы энәләре) 3 стакан һыу ҡойорға, 1 лимон һуты өҫтәргә һәм болғатып торорға. 2 көн ҡараңғыла тотҡас, көнөнә 1-әр стакан эсергә.

❖ Юғары ҡан баҫымы менән ауырыусыларға тәүлегенә 3-4 тапҡыр ҡабығы менән ярты лимон ашау файҙалы. Шулай уҡ лимон йәки әфлисун ҡабығына телгән күләмдә бал ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1 балғалаҡ ҡабул итергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# АҠ БОЛҒАР ИЛЕ, ЙӘКИ ОЛО БАШҠОРТОСТАН

**XXI быуатта башҡорт халҡының тарихына, уның йәшәгән территорияларына ҡағылышлы күп кенә китаптар яҙылыуына ҡарамаҫтан, тарихыбыҙҙың билдәле булмаған, өйрәнелмәгән, асыҡланмаған яҡтары ла бар әле. Социология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Б. Бикбай исемендәге әҙәби премия лауреаты Йәдкәр БӘШИРОВтың күптән түгел баҫылып сыҡҡан "Урал һәм Волга буйы халыҡтары тарихына яңы ҡараш" тигән хеҙмәте ошо мәсьәләгә ҡайһы бер асыҡлыҡтар индерергә ынтылышы менән ҡиммәт.**



## Биләмә сиктәре тураһында

Башҡортостан тарихын тәрәнерәк өйрәнгән һайын, башҡорттар йәшәгән территорияларҙың киң булыуына йәнә бер тапҡыр инанаһың. Башҡорттарҙың ерҙәре төньяҡта Аҡ диңгеҙҙән алып, көньяҡта Яйыҡ йылғаһының урта ағымына тиклем, көнсығышта Тобол йылғаһынан алып, көнбайышта Волга йылғаһына тиклем һуҙылған була. Хатта ҡайһы бер айырым фараздар башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙең Финляндияға тиклем барып етеүе хаҡында һөйләй. Айырым ырыуҙарҙың тарихын, уларҙың йәшәү территорияларын алғанда, география тағы ла киңәйә. Мәҫәлән, бөрйәндәрҙең киң территорияларҙа йәшәүе тураһында билдәле. Икенсе мәғлүмәттәр буйынса, Оло Башҡортостанда йәшәгән ырыуҙар Финляндияның көнбайыш сиктәренән алып, Иртыш йылғаһы бассейнына тиклем, төньяҡта Поляр түңәрәктән алып, көньяҡта Иҙел- Болғар дәүләте менән шартлы рәүештә сикләшкән һәм Аҡ Болғар атамаһы аҫтында билдәле булған дәүләт булып ойоша. Аҡ Болғар составында төрки милләттәр бик күп ханлыҡтарға һәм дәүләт берләшмәләренә бүленә. Әммә халыҡтың төп өлөшөн башҡорт ырыуҙары вәкилдәре тәшкил итә.

Билдәле ғалимдар Сәләм Әт-Тәржүмән менән Мәғсүди яҙмаларына ярашлы, IX быуат уртаһында төркиҙәрҙең хәрби-сәйәси берләшмәһе ойошҡан саҡта төрки ҡәбиләләре башында Башғард исемле кеше тора. Бөрйән, юрматы, үҫәргән, табын, тамъян, һәм башҡа ырыу вәкилдәре үҙҙәрен башғардлылар, йәғни башҡорттар тип атай. Был ерҙәр Башҡорт иле тигән атама ала. Ырыуҙар башлығы Башғард тураһында башҡорттарҙа ғына түгел, башҡа халыҡтарҙа ла күп кенә мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалған. Был факт телгә алынған тарихи шәхестең заманы өсөн билдәле кеше булыуы хаҡында һөйләй. Шулай уҡ XIV быуаттың аҙағы тарихынан ете ырыу: табын, ҡатай, ҡеүәкән, әйле, ҡыпсаҡ, тамъян, юрматыларҙан торған башҡорт дәүләттәре союзы ойошторолоуы хаҡында беләбеҙ. Күрәһең, был союз сиктәрендә һәр ырыу, бәлки, бер нисә ырыу, айырым дәүләтте тәшкил иткәндер.

Ҙур территорияларҙа йәшәгән башҡорттар бер нисә дәүләт булып берләшә алған. "Оло Башҡортостан" исеме аҫтындағы бындай берләшмә ысынлап та булған. Ләкин башҡорт донъяһы үҙенең үтә етди булыуы арҡаһындамы, әллә "оло ағаһынан" ҡурҡынҡырапмы, ошо хаҡта һөйләп бармай. Бындай Башҡорт дәүләттәре берләшмәһе тураһында һәм Эске һәм Тышҡы башҡорттар хаҡында күп кенә мәғлүмәттәрҙе беҙгә Урта быуаттарҙа билдәле булған авторҙарҙың береһе Әл-Иҙриси ҡалдырған. Ул "Эске башҡорттар"ҙың көньяҡтараҡ, урманлы-далалы ерҙәрҙә, ә "Тышҡы башҡорттарҙың" төньяҡта, таулы-урманлы райондарҙа йәшәүен билдәләгән. Шулай уҡ Әл-Иҙриси Эске башҡорттарҙың Кастра менән Мастра ҡалалары булыуын да телгә ала. Телгә алынған ҡалалар Европа ғалимдары Башкерти һәм Мәрмәр тип атаған ҡалалар менән тап килә.

Әлбиттә, башҡорттарҙың мөнәсәбәттәре күрше йәшәгән бөтә халыҡтар менән һәр саҡ яҡшы булмай. Теге йәки был яҡтың сауҙа өлкәһенә йоғонтоһон арттырырға теләүе аңлашылмаусылыҡтарға килтереп тора. Мәҫәлән, Әл-Иҙриси, Тышҡы башҡорттар менән болғарҙар араһында Карукийа ҡалаһы өсөн булған ыҙғышты күҙ уңында тотоп, "болғарҙар йыш һөжүм итә... һәм улар үҙ-ара борон-борондан һуғыш алып баралар", тип яҙа. Ғөмүмән, Һамар Луҡаһы районы күп халыҡтарҙы ҡыҙыҡһындырған урындарҙың береһе була.

## Хандар, бейҙәр, мырҙалар…

Башҡорт дәүләтенең феодаль иерархик баҫҡысы төрлө замандарҙа төрлөсә төҙөлә. Уның төҙөлөшөнә айырым заман, шулай уҡ күрше дәүләттәр ҙә йоғонто яһай. Башҡорт мөхитендә юғары баҫҡысты алып тороусы вазифаны билдәләү өсөн йыш осраҡта хан атамаһы ҡулланыла, ошо уҡ атама аша бөтә төрки халыҡтарҙың да ханлыҡ тип аталған дәүләт ойошмаһы төҙөлә.

Башҡорт ырыуҙарының етәкселек структураһы көнбайыш төрөктәрҙекеке менән бер була. Мәҫәлән, төньяҡ-көнбайышта йәшәгән башҡорт ырыуҙары конфедерацияға берләшә. Ырыуҙар менән бей идара итә. Ҡайһы бер ырыуҙарҙа бейҙәр һайланып ҡуйылһа, икенселәрендә был вазифа нәҫелдән-нәҫелгә күсә. Һәр конфедерацияға ингән кешеләрҙең һаны бер нисә меңгә етә.

Етәкселек органдарын һайлау ирекле рәүештә бара. Шул уҡ ваҡытта һайлауҙар, хазарҙарҙағы кеүек үк, көнсығыш төрөктәренең ҡағанатына йүнәлеш тота. Ҡеүәтле ырыуҙар берләшмәһенең башында хан тора. Сыңғыҙидтар (чингизидтар) заманында башҡорт йәмғиәтендә иң юғары ҡатлам бейҙәр тип атала. Бейҙәр хандарҙан кәм булмаған власҡа эйә була. Ҡайһы берҙәрен, мәҫәлән, Майҡы бейҙең нәҫелен XVI быуаттың уртаһына тиклем хандар тип йөрөтәләр (Рәсәй составына ҡушылғас, XVI быуаттың уртаһынан алып, башҡорт бейҙәре һәм тархандары кенәздәр тип йөрөтөлә башлай, был уларҙы Мәскәү кенәздәре менән бер баҫҡысҡа ҡуя). Дәүләттәге бөтә ерҙәр хандыҡы һанала, крәҫтиәндәр ерҙәр өсөн һалым түләй. Шул уҡ ваҡытта ханлыҡтар олоҫтарға бүленә, олоҫтар менән мырҙалар идара итә.

Дәүләттең төп мәсьәләләрен хәл итеү өсөн (ханды һайлау, йәки уны вәкәләттәренән бушатыу; солох йәки һуғыш иғлан итеү; халыҡ-ара килешеүҙәр төҙөү) ҡоролтай исеме аҫтында билдәле булған ҙур йыйын йыйыла. Унда хәрбиҙәр, дин әһелдәре, ер хужалары саҡыртыла. Халыҡтың башҡа ҡатламдары ҡоролтайҙа ҡатнашмағанға күрә, уны бар халыҡ йыйыны тип атап булмай.

Урта быуаттарҙа күп кенә хандар юғары дәүләт вазифаларын алыу өсөн Башҡортостанда әҙерлек үтә. Мәҫәлән, Себер ханы Күсем (1537-1597) шундайҙарҙың береһе. Тарихи сығанаҡтарҙа ошо әҙерлекте алып барған күп кенә хандарҙың һәм бейҙәрҙең исемдәре билдәле. (Уларҙың исемдәре Н.А. Мәжитов менән Ә.Н.Солтанованың "История Башкортостана. Древность. Средневековье." китабында телгә алына).

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Эш ҡоралынан, малдан, кейем-һалымдан һәм торлаҡтан тыш, башҡорттарҙа милек хоҡуғы ер участкаларына ла тарала. Община ере менән файҙаланғанда шәхси милек хоҡуғы шәхси хеҙмәт һалынған участкаларға ғына танылған. Уларға өйрәк йәки ҡаҙ аулау урындары, балыҡ тотоу урындары, иген сәсеү өсөн таҙартылған аҡландар ингән. Аҡлан тип һөрөнтө ер йәки бесәнлек өсөн ҡалдау ерҙе күтәреп эшләнгән урман участкалары иҫәпләнгән. Бындай ерҙәр һуңынан милек мираҫы итеп тапшырылған.

Башҡорттарҙың йәмәғәт тормошо халыҡ байрамдарында, балалар уйындарында асыҡ сағыла.

Башҡорттарҙа балалар уйындары бик күп (ашыҡ, һәре, туп, өсән, түбәтәй көтөүсе, үле, билге, кәзә һөҙөш, өсҡуңыс, өсбүкән һ.б.) һәм урынға ҡарап уларҙың варианттары күп, шуға уларҙы ентекле һүрәтләү мөмкин түгел. шулай ҙа, балалар уйындарын күҙаллау өсөн, бер-нисәһен яҙып китеүҙе кәрәк һанайым

Һөйәк йәки ашыҡ уйыны ниндәйҙер кимәлдә рустарҙың уйынына оҡшаған, әммә һиҙелерлек айырыла. Башҡорттарҙа ашыҡ фаланга түгел, ә астрагал, йәғни йорт хайуандарының умыртҡа һөйәктәре була. Шул уҡ һөйәк һаға булып та хеҙмәт итә. Ашыҡтар бер рәткә теҙеп ҡуйыла һәм уйынсылар үҙ сираттарын асыҡлар өсөн һағаларын сөйә. Кемдең һағаһы тура (төҙ) ята, шул кеше уйынды башлай. Икенсе булып һағаһы арҡаһына (әлсе) ятыусы һанала. Һағаһы уң яҡ ҡабырғаға (бәйүк) ятыусы өсөнсө була. Һуңғы булып һағаһы һул яҡ ҡабырғаға (сәйүк) ятыусы ҡала. Әгәр ике уйынсының һағаһы бер төрлө ятһа, улар ҡабаттан йәрәбә ташлай йәки кондан алыҫыраҡ ятҡан һаға хужаһы уйынды алданыраҡ башлай. Башҡорттарҙың ашыҡ уйынында тағы бер үҙенсәлек бар: барлыҡ һуғылған ашыҡтарҙы бары һағаны ташлағандан һуң кемдеке төй торошонда ята, шул ғына ала. Әгәр ул әлсе, бәйүк, сәйүк торошонда төшә икән, уйынсы һаға менән бер кимәлдә ятҡан ашыҡтарҙы ғына ала.

Башҡорттарҙың икенсе уйынында ҡулланылған туп кейеҙ кеүек үк йөндән яһала. Уны, рус уйындарындағы һымаҡ, сәкән һәм суҡмар менән һуғып, соҡорға төшөрөргә кәрәк. Барлыҡ төркөм уйындарында ла ҡатнашыусылар сыбағас тотоп, ике төркөмгә бүленә. Уйынсылар яҡынса тигеҙ көстәрҙән тора һәм шартлы рәүештә "сәй һәм шәкәр", "ер һәм һыу", "икмәк һәм тоҙ" һ.б. кеүек атама алалар. Һуңынан башлыҡтарға килеп, уның нимә - "сәйме, шәкәрме" - теләүен асыҡлайҙар һ.б.

Ҡыҙҙар араһында бигерәк тә өсҡуңыс һәм өсбүкән уйындары киң таралған. Өсбүкән уйынында өс ҡыҙ өс мөйөш яһап тора, дүртенсеһе уртала ҡала; өс ҡыҙ урындарын алмашҡанда, урталағыһы уларҙың береһенең урынына баҫып өлгөрөргә тейеш; был ваҡытта башҡа уйынсылар әйлән-бәйлән уйнай.

Малайҙар йәйәнән атып ярыша. И.И. Лепехин һүҙҙәренә ҡарағанда, йәйәнән атып ярышыу элек ололарҙың яратҡан шөғөлө булған.

✓ *Китаптар менән эш итеүселәрҙең әрһеҙ ҡыланыуын, биттәрҙе бысратыуын күргәс, һирәк осрай торған китаптарҙы кемгәлер биреүҙе, хатта кешеләрҙе уларға яҡын ебәреүҙе тыйыу тураһында бойороҡ та сығарғайным...*



**Яңыраҡ З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте 95 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Ошо оло ваҡиға айҡанлы нәшриәтте төрлө йылдарҙа етәкләгән директорҙарҙы - яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәлим ХИСАМОВты, философия фәндәре кандидаты Зөфәр ТИМЕРБУЛАТОВты һәм нәшриәттең бөгөнгө директоры Илһам ЙӘНДӘҮЛӘТОВты редакциябыҙға саҡырҙыҡ. Әңгәмәбеҙҙе "Нимә ул китап?" тигән тәү ҡарашҡа ябай ғына һорау менән башлап ебәргәйнек, ҡунаҡтарыбыҙ был һүҙҙең беҙ бөтөнләй күҙ алдына ла килтермәгән тәрән мәғәнәһен асты, ул ғына ла түгел, беҙ сала-сарпы ғына ишетеп белгән "ҡарыкитап", "ҡарһүҙ" тигән онотола барған төшөнсәләргә лә аңлатма бирҙе. Түбәндәге әңгәмә ярҙамында башҡорт нәшриәте эшенең үткәненә, бөгөнгөһөнә байҡау яһай, нәшриәт эшмәкәрлегенең ҡайһы бер нескәлектәре менән таныша алырһығыҙ.**

**Нәшриәт тураһында һүҙ башлар алдынан тәүҙә "китап" һүҙенә аңлатма биреп үтеү яҙыҡ булмаç. Һеҙҙеңсә, нимә ул китап?**

**Зөфәр Тимербулатов:** Беҙ файҙаланып өйрәнгән ҡатырға тышлы, ҡағыҙ эсле китаптар ғына китап, тиһәк, был дөрөçлөккә бик үк тап килеп етмәç, моғайын. Уның мәғәнәһе шаҡтай киң. Китап ул, тәү сиратта, белемде, тәжрибәне, аҡылды һаҡлау ысулы. Әйтәйек, таштарға төшөрөлгән һүрәттәр, яҙыуҙар булһынмы, пирамидаларҙағы иероглифтармы, телдән-телгә тапшырыла килгән ауыҙ-тел ижады өлгөләре булһынмы - барыһы ла китаптар. Шул уҡ Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәрҙе лә беҙ китап тип атай алабыҙ. Ни өсөн? Сөнки, ул һүрәттәрҙә меңәр йыл элек тупланған һәм таштарға төшөрөлгән мәғлүмәт, белем сағылыш тапҡан. Шүлгәнташ мәмерйәһендәге яҙмалар - әле өйрәнелеп, уҡылып бөтөлмәгән китап. Уны уҙған быуаттың 50-се йылдарынан алып бөгөнгәсә тиçтәләгән ғалим өйрәнде. Һәр ғалим, үҙ сиратында, был яҙмаларға ҡарата үҙенсәлекле фекер әйтте, яңы тема асты. Башҡорт китабы тураһында һүҙ алып барабыҙ икән, һүҙҙе ошонан башларға кәрәк тә инде, миңә ҡалһа. Икенсенән, "Урал батыр" эпосы ла быуындан-быуынға, телдән-телгә еткерелә килгән китап ул. Китап халыҡты байыта, уға әхлаҡи тәрбиә бирә, телде, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлауға, үçтереүгә булышлыҡ итә икән, был турала һүҙ алып барғанда алғы планға шул сығырға тейеш. Китаптың формаһы ниндәй булыуы иһә - бөтөнләй икенсе мәсьәлә.

**Ғәлим Хисамов:** Китап - ул белем сығанағы, белемдең башы. Зөфәр Мөхтәр улының әйткәненең төп мәғәнәһе лә шул. Әгәр Шүлгәнташтағы һүрәттәрҙе, билдәләрҙе һәр кем үҙенсә уҡый икән, әле был, ул һүрәттәр китап түгел, тигәнде аңлатмай. Хатта ташҡа баçылған китапты ла кешеләр төрлөсә уҡый һәм төрлөсә аңлай. Шуға күрә, китаптың беренсе функцияһы - уның белем сығанағы булыуы. Шуға күрә, беҙ стенаға төшөрөлгән билдәләрҙе лә, ташҡа яҙылған Орхон-Йәнәсәй яҙмаларының Күлтигин яҙыуын да - һәммәһен дә китап тип атай алабыҙ. Әлбиттә, был бик шартлы атама. Башҡорттоң быуындан-быуынға телдән тапшырыла килгән ауыҙ-тел ижады үрнәктәрен дә белем сығанағы тип әйтәбеҙ. Уларҙы ла "китап" тип йөрөтөргә хоҡуғыбыҙ бар. Дөрөç әйтелде: китаптың формаһы төрлөсә булырға мөмкин: береһе - таш, икенсеһе - хәтер, өсөнсөһө - ҡағыҙ, дүртенсеһе - интернеттағы, эфирҙағы ниндәйҙер мәғлүмәт. Уларҙың бөтәһе лә бер исем менән йөрөтөлә ала. Ошо яҡтан, әлбиттә, китапты төрлө мәғәнәлә аңлап була: һәр кемдең үҙ хоҡуғы, үҙ ихтыяры. Беҙ уны был юлы киң мәғәнәлә ҡарайбыҙ.

**Илһам Йәндәүләтов:** Иң мөһиме, китап үҙенең маҡсатына хеҙмәт итергә тейеш. Уның маҡсаты ниндәй? Быуындан быуынға белемде, аҡылды, фекерҙе күсерә килеү. Шул уҡ эпостарыбыҙҙы атанан улға һөйләп ҡалдырғандар. Уны яҙма рәүештә уҡымаһалар ҙа, ул беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән. Ғәжәп бит! Әлбиттә, беҙ ул эпосты бөгөн матур, шыма ҡағыҙҙан уҡыйбыҙ. Китаптың формаһы ғына үҙгәрҙе, ә эстәлеге шул уҡ ҡалды.

**Ҡарыкитап нимә ул? Уларҙың өлгөһө бөгөн дә бармы?**

**Ғәлим Хисамов:** Ҡарыкитап (ҡарһүҙ ҙә тип әйтәләр) - ташҡа баçылған боронғо китап ул. Шулай ҙа, "ташҡа баçылған" тиелһә лә, ысынбарлыҡта, ташҡа бер ваҡытта ла бер ни ҙә баçмағандар. "Ташҡа баçыу" һүҙе балсыҡ-китаптар таш рәүешендә һаҡланғанға күрә барлыҡҡа килгән. Башҡорт халҡының ҡарыкитаптары бөгөн дә бар. Уларҙың ҡайҙа һаҡланғанлығын элек айырым кешеләр генә белгән. Ә ни өсөн был ҡомартҡыларҙы теләһә ҡайҙан табып булмай, тигән һорау тыуыуы тәбиғи. Сөнки был китаптар ныҡ йәшереп тотолған. Шуға ла уларҙы табына торған кеше һындары кеүек еңел осратырмын тимә. Килеп сығышына туҡталғанда, башҡорттоң ҡарыкитаптары - Орхон-Йәнәсәй яҙмаларының бер өлөшө. Икенсе вағыраҡ өлөшө лә бар - улары балсыҡҡа баçып яҙылған. Улар махсус урындарҙа әле лә ята. Беҙҙең башҡорт, төрки халыҡтары археологтары был эшкә тотонғаны ғына юҡ. Әгәр ҙә махсус рәүештә өйрәнә башлаһалар, бер-нисә йыл эсендә был тема буйынса әллә ниндәй асыштар яһаясаҡтар. Әлеге ҡомартҡылар араһында руник яҙмалар ҙа, рунаға тиклемге яҙмалар ҙа бар. Әйтәйек, беҙҙең бөгөнгө ырыуҙар тамғалары - үҙҙәре үк яҙыу. Һәр тамға үҙе ниндәйҙер өн белдерә, ниндәйҙер һүҙ мәғәнәһенә эйә. Ана шулар менән яҙылған ул ҡарыкитаптар. Ул тамғалар менән яҙылған яҙыуҙарҙы беҙ бүтән әйберҙәрҙә лә осратабыҙ. Мәçәлән, беҙҙең ҡара ҡыпсаҡтарҙың ырыу тамғаһы - һәнәк формаһындағы тамға төшөрөлгән берәй ағасты тапһаң, унан да байтаҡ мәғлүмәт уҡып була. Йәғни, ошо тамғаның үҙендә генә лә тотош ырыу тураһында бик күп мәғлүмәт ята. Йәғни, тамға - үҙе үк китап.

Ҡарыкитаптарға ауаздаш ғибрәтле бер риүәйәт тә бар. Хәҙерге Учалы районындағы Уралтау тауы тирәһендә Уҡ йылғаһы аға. Ләкин ул йылға уҡ һымаҡ төҙ, йәғни тура ғына аҡҡан йылға түгел. Ә ниңә уны есеменә тура килмәгән исем менән атағандар һуң? Йылғаның исеме беҙҙең яҡҡа урыçтар килмәç борон булған бер хәл менән бәйле. Биш ырыуҙың махсус йыйылған алтыны булған. Йәғни, ырыуҙар һәр береһе үҙ өлөшөн индереп, бөгөнгө тел менән әйткәндә, "алтын фонд" барлыҡҡа килтергән. Ул алтындың ҡайҙа ятҡанын һәр ырыуҙан бер генә кеше белгән. Урыçтар, биш ырыу башҡорто ҡайҙалыр алтын һаҡлай икән, тигән хәбәрҙе ишетеп ҡалған да, серҙе белеүсе кешене эҙләп тапҡ-шлап Зәки Вәлиди ойоштора. Ошо маҡсат менән ул, Петербургҡа кешеләр ебәреп, китап баçыу ҡорамалы (типография) һатып алдыра. Яңылышмаһам, иң беренсе нәшриәт Стәрлетамаҡта урынлаштырыла. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, дәүләтселек нигеҙе - китап икән ул. Беҙҙең нәшриәт тап ошо ваҡиғаға нигеҙ булған да инде. Йәғни, нәшриәт - халыҡты тарих менән ныҡлап таныштыра, уны ойоштора, берләштерә торған көслө, әһәмиәтле ҡорал да ул. Нәшриәтебеҙ барлыҡҡа килгәс, Шәйехзада Бабичтың шиғырҙары баçма рәүештә ҡулдан-ҡулға тарала бит.

**Илһам Йәндәүләтов:** 1919 йылда нәшриәт бушҡа ғына барлыҡҡа килмәгән. Тимәк, уның ойошторолоуына маҡсатлы рәүештә булышлыҡ иткәндәр. Әле бына яңыраҡ нәшриәттең 95 йыллыҡ юбилейына тип Мәскәүҙән килгән ҡунаҡ та: "Һеҙ - Рәсәйҙә төҙөлгән иң беренсе нәшриәттәрҙең береһе", - тигәйне. Йәғни, Башҡортостан китап нәшриәтенең бик оло һәм олпатлы икәнен мәскәүҙәр ҙә таный. Китаптың әһәмиәтен элек-электән яҡшы белгәндәр. Яҙыусылар халыҡҡа фекерен тап ошо китап аша еткергән, бәйләнеш ептәрен тап китап ярҙамында нығытҡан. Уларҙың мөрәжәғәттәре, Батыршаның хаты һымаҡ, се сиратта рухи байлыҡ, китап тураһында ҡайғыртҡан.

**Ғәлим Хисамов:** Эйе, Бабич башҡорт хөкүмәтенең сәркәтибе булғанға күрә, ул көндө типография менән бергә Башҡорт хөкүмәтенең документтары ла тартып алына.

Китап тарихы тураһында һүҙ башлағанда, башҡорт китабының тамыры 95 йылдан күпкә төптәрәк ятыуын да билдәләргә кәрәк. Һәр хәлдә, төрки телле халыҡтарҙың XI-XIII быуаттарҙа ҡағыҙға, тирегә яҙылған китаптарын беҙ үҙебеҙҙең китаптарҙың башы, тип хаҡлы рәүештә атай алабыҙ. Бөгөнгө формалы китаптар шул мәлдән башлана. Бында боронғо иран телендә ташҡа (балсыҡҡа) баçылған "Гилгәмеш" эпосын ғына иçкә төшөрөү ҙә етә. Әйткәндәй, ул китап та тиҙ генә табылмаған - тау тишегенә йәшерелгән урынынан уны бик һуң табалар. Йомғаҡлап, шуны әйтке килә: беҙҙең китаптарҙың тарихы меңәр йылдарға һуҙыла. Ул электрон китап формаһында дауам итәсәкме, йә бүтән төрлө формаламы - барыбер дауам итәсәк. Китап, белем шишмәһе, белем сығанағы булараҡ, мәңгелек һаҡлана торған хазина. Китап булһа, халыҡ та бар. Ул халыҡты милләт итеп ойоштора торған бер ҡоралдарҙың береһе. Шул йәһәттән уның әһәмиәте бик ҙур. Бөгөн нәшриәт башҡарған эш

**БАШҠОРТ КИТАП**

## үткән тарихты ла сағылдырһын,

ан. Теге кеше әлеге йылға буйында ғына көн күрә икән. Уны төрлөсә ҡурҡытып та, алдатып та ҡарайҙар, ләкин телен сисә - алтындың ҡайҙа икәнлеген әйттерә алмайҙар. Ахыр сиктә, араҡы килтерәләр. Эсерәләр. Баш еңеләйгәс, аҡыл ҡыçҡарғас, тел оҙонайя бының. Серҙе әйтергә, тип, ауыҙын асыуы була, эргәһендә ултырған әле балиғ тә булмаған улы уға уҡтан атып та ебәрә. Сер сиселмәй ҡала. Ошо ғибрәтле ваҡиғанан һуң йылғаға "Уҡ" исеме бирәләр. Китаптар менән дә шул уҡ хәл: уларҙы махсус һаҡлаған, серҙе сисмәçкә тейешле кешеләр булған. Уларҙы "бабалар" тип атағандар. Беҙҙең Көйөргәҙе районында өс Баба ауылы бар. Беҙҙең тирәлә лә бер-нисә мәмерйә билдәле, уларҙың эсендә лә ҡомартҡылар йәшерелеүе мөмкиндер, тип уйлайым. Китап - аҡыл, белем сығанағы икәнен бик борондан белгәндәр, хәҙер генә бының мәғәнәһе юғалып бара...

**Халҡыбыҙҙың тәүге ҡағыҙ китаптары ҡасан барлыҡҡа килгән?**

**Зөфәр Тимербулатов:** Мин боронғо замандарҙағы баçмалар тураһында хәбәрҙар түгелмен - сағыштырмаса яңы тарих тураһында ғына бер-ике һүҙ әйтмәксе булам. Билдәле булыуынса, Башҡортостанда нәшриәт эшен тәү башлап Зәки Вәлиди ойоштора ... яҙма рәүештә таратылған. Башҡорт яҙма китабының XX быуат баштарындағы роле баһалап бөткөһөҙ ҙур. Әйткәндәй, Шәйехзада Бабич ошо типографияны күсереп алып китеп барған сағында үлтерелә бит, быны ла онотораға ярамай. Ул ваҡытта һүҙҙең әһәмиәтен белгәнгә күрә, типографияны үҙҙәре менән бергә күсереп йөрөткәндәр ҙә инде.

**Ғәлим Хисамов:** Ул типография әлеге китап нәшриәтенең типографияһы түгел - быға тиклем беренсе типография Темәстә урынлашҡан булған. Уны ла Зәки Вәлиди үҙе ойошторған. Шәйехзада Бабич Темәстән Мораҡҡа тап ошо типографияны күсергән ваҡытында үлтерелгән. Бабичтың "Зәки һеҙҙе алданы, тип уйламағыҙ" шиғыры шул типографияла баçылып таратылған. Бабичты, Иркәбаевты язалап үлтергәс, типографияны ла юҡ итәләр. Уны һүтеп, урыç һалдаттары хәрефтәрен берәмләп өләшеп алып, тишеп, тәре яһап, муйындарына тағалар. Был - билдәле факт.

**Зөфәр Тимербулатов:** Минеңсә, Бабичты ул шағир булғаны өсөн генә түгел, ә типографияны юҡ итеү өсөн үлтергәндәрҙер. Уйлап ҡараһаң, ниндәй генә ҡатмарлы ваҡыттарҙа ла халҡыбыҙҙың аçыл улдары донъяуи мәсьәләләрҙе ситкәрәк ҡуйып, иң беренкемгәлер көндәлек, ябай эш кеүек кенә күренергә мөмкин. Ана шул көндәлек эштән быуатлыҡ тарих йыйыла ла инде.

**Тәүге китаптар, йә уларҙың барлығын дәлилләгән берәй документтар, һүрәттәр һаҡланғанмы?**

**Зөфәр Тимербулатов:** Беҙҙең Башҡортостан Дәүләт китап палатаһында ниндәйҙер нөсхәләр, боронғо китаптар фонды бар. Фондта ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған китаптар бихисап. Ул фондтағы китаптарҙың барыһын да һанап бөтөрөү мөмкин түгел. Мине икенсе проблема борсой: ошо китаптарҙы өйрәнеү һүлпән бара. Хатта улар бөтөнләй өйрәнелмәй, тиерлек. Мәçәлән, Китап палатаһынан тыш, бындай ҡомартҡы-китаптар БДУ-ла ла һаҡлана. Төрлө урындарҙа һаҡланғанға күрә, ғалимдарҙың ул китаптарҙы комплекслы өйрәнеүҙә ҡыйынлыҡтар кисереүе көн кеүек асыҡ. Башҡортостан Дәүләт китап палатаһын етәкләгән сағымда ул китаптар менән эш итеүселәрҙең әрһеҙ ҡыланыуын, биттәрҙе бысратыуын күргәс, һирәк осрай торған китаптарҙы кемгәлер биреүҙе, хатта, кешеләрҙе уларға яҡын ебәреүҙе тыйыу тураһында бойороҡ та сығарғайным...

Китап палатаһы бинаһын яҙ һайын һыу баça ине. Хәҙер уны

✓ ***Баҡтиһәң, Көнбайыш илдәре, электрон китаптар этабын үтеп, уның етешһеҙлектәрен аңлап, кире ҡағыҙ китаптарға ҡайтып яталар икән. Ә беҙ улар баҫҡан "тырмаға" баҫырға итәбеҙ һымаҡ килеп сыға.***



# КИТАБЫ...

## киләсәкте лә күҙаллатһын

ремонтланылар, әлбиттә. Хәҙер унда аҙмы-күпме шарттар булдырылған. Ике республикала - Башҡортостан менән Татарстанда ғына Китап палатаһы тороп ҡалды. Бөгөн ҡайһы бер кешеләр: "Әйҙәгеҙ, ошо палатаны бөтөрәйек, уның нимәгә хәжәте бар? Уны китапханаға ҡушайыҡ", - тип әйтергә лә тартынмай. Бинаны алырға ла һатырға - бөтөн ҡайғылары шул. Ә фондтың ҡиммәтен баһалаған кеше юҡ.

**Боронғо тарихтан бөгөнгө заманға әйләнеп ҡайтайыҡ. Һеҙ "Китап" нәшриәтендә директор булған саҡта ниндәй мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе төп маҡсатығыҙ итеп күрҙегеҙ, нимәгә төп иғтибар бүлдегеҙ?**

**Ғәлим Хисамов:** Минең нәшриәтте етәкләгән осор тынғыһыҙ 90-сы йылдар башына тура килде. Ул заманда етәксенең иң ҙур бурысы - китап сығарыуҙы дауам итеү, уның өсөн аҡса эҙләү ине. Тырышлыҡтың һөҙөмтәһе булды -китап сығарыуҙы туҡтатманыҡ. Туҡтатмау ғына түгел, киреһенсә, аҙмы-күпме үҫешкә өлгәштек. Икенсенән, нәшриәтте икенсе бинаға күсерҙек. Тағы бер ҙур эшебеҙ шул булды - 50 мең тираж менән башҡортса Ҡөрьән Кәрим баҫтырып сығарҙыҡ. Эште һәүетемсә генә юлға һалып эшләп ятҡанда матбуғат министры булып эшләүсе Зөфәр Мөхтәр улы Сит ил эштәре министрлығы янындағы бер уҡыу йортона уҡырға китте. "Әйҙә, хәҙер һин министр бул инде", - тип, мине министр итеп тәғәйенләп ҡуйҙылар.

**Зөфәр Тимербулатов:** Нәшриәттә йылдар буйына баҫылмай ятҡан ҡулъяҙмалар бик күп. Нәшриәт директоры булған сағымда шул ҡулъяҙмаларҙы сығарыуға, нәшриәттең матди-техник базаһын яҡшыртыуға аҡса табыу маҡсатында күп эш атҡарырға тура килде. Нәшриәт директорының төп эше - аҡса эҙләү икәне ошо өлкә менән таныш кешегә сер түгел. Китап сығарыу менән генә нәшриәт үҙенә үҙе аҡса эшләү һәләтенә лә, мөмкинлегенә лә эйә түгел. Учалыла, Сибайҙа, тағы бер-нисә урында үҙебеҙҙең магазиндарҙы астыҡ. Ә магазин ни өсөн кәрәк? Яуапты заман үҙе бирә: китаптарҙың ҡулъяҙмаһын алыу өсөн - нәшриәт, сығарыу өсөн - комбинат һәм һатыу өсөн магазин булырға тейеш. Әйткәндәй, нәшриәт янында үҙебеҙҙең келәтебеҙ, транспортыбыҙ, бер-нисә магазиныбыҙ булырға тейеш ине. Уныһын атҡарырға өлгөрмәнем. Йомғаҡлап әйткәндә, директор булып эшләү дәүерендә бар тырышлығым - башҡорт китабын һаҡлауға, уны үҫтереүгә йүнәлгән эштәрҙән ғибәрәт булды. Нәшриәт эргәһенә Зәйнәб апайыбыҙға һәйкәл тураһында тәҡдим менән етәкселеккә мөрәжәғәт иткәйнек, әлегә ул эш хәл итеүҙе көтә. Нәшриәт эргәһендә ошо һәйкәл, магазиндар, полиграфия комбинаты урынлашһа, үҙенсәлекле бер китап йорто барлыҡҡа килер ине. Электрон китаптар сығарыуҙы ла беҙ башланыҡ. Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығына ҡарата бик күп тарихи китаптар, Бөйөк Ватан һуғышынан ҡайта алмаған яугирҙарға арналған "Память", еңеү яулап имен-аман ҡайтҡандарға арналған "Они вернулись с победой", илде, фронтты туйҙырыу, кейендереү, аяҡҡа баҫтырыу өсөн тир түккән эшселәргә арналған "Герои тыла" йыйынтыҡтарын да баҫтырҙыҡ. Шулай уҡ нәшриәтте яңы бинаға күсереү өсөн дә бик күп көс һалырға тура килде. Нәшриәт менән полиграфия комбинатын бер ойошмаға әйләндереү тураһындағы хыялым ғына тормошҡа ашмай ҡалды.

**Илһам Йәндәүләтов:** Минең дә төп бурыстарҙың береһе - башҡорт китаптарын сығарыуҙы дауам итеү. Әлбиттә, әлекке директорҙар һәм коллективтың тырышлығы менән матди-техник базабыҙ яҡшыртылған. Ҡағыҙ мәсьәләһе лә 90-сы йылдарҙағы һымаҡ киҫкен тормай. Шуға бөгөн беҙҙең төп бурыс - башҡорт китабының бәҫен төшөрмәй генә, китап сығарыуҙы дауам итеү һәм киләсәк быуындарға быуаттар буйы килгән аҡылды, фекерҙе тапшырыу. Әлбиттә, яҙыусылар, яҙырға теләүселәр күп, шул уҡ ваҡытта китабын нәшер итергә теләүселәр уларҙан да күберәк. Ләкин, Зөфәр Мөхтәр улы менән Ғәлим Афзал улы әйткәнсә, бөтәһе лә финанска барып тоташа. Шул сәбәпле, тиҙ арала барыһының да әҫәрҙәрен баҫтырып сығарыу мөмкин түгел, үкенескә ҡаршы. Әлбиттә, республика бюджетынан махсус аҡса бүленә. Әлеге осорҙа йылына 200-ҙән ашыу китап, шул иҫәптән мәктәптәр өсөн дәреслектәр, балалар әҙәбиәте, махсус төр баҫмалар, нәфис әҙәбиәт сығып килә. Рәсәй кимәлендә башҡа төбәктәр менән сағыштырғанда, был яҡшы күрһәткестәрҙең береһе иҫәпләнә. Тағы ла шуныһы: беҙ әле үҙебеҙҙә донъя күргән китаптарҙы республика буйынса таратыуға иғтибарҙы көсәйттек. Быйыл ғына бер нисә район-ҡалала сауҙа нөктәләре астыҡ, был юҫыҡта эштәр киләсәктә лә дауам итәсәк.

**Хәҙер беҙҙә лә электрон китаптар барлыҡҡа килә. Ләкин уларҙы башҡорт яҙыусыһы һәм башҡорт уҡыусыһы ҡабул итәме?**

**Зөфәр Тимербулатов:** Электрон китап - ҡағыҙ китаптар һымаҡ уҡ мөхәррирләнгән, әммә ҡағыҙға түгел, ә интернет донъяһына ҡуйылған китап ул. Икенсе төрлө әйткәндә - виртуаль китап. Уны йәштәр бик тиҙ ҡабул итте. Оло быуын яҙыусылары иһә әлегә китаптарын ошо форматта таратыуға бик һаҡ ҡарай. Ҡағыҙ китаптар һымаҡ уҡ, электрон китапты ла, сығарыуын сығарғас, һатырға кәрәк. Бының өсөн ниндәйҙер яңы компьютер программалары талап ителә. Ҡыҫҡаһы, электрон китап сығарып таратыу ҙа еңел эш түгел. Хеҙмәткәрҙәрҙе өйрәтеп алыу күп көс талап итә. Уның ҡарауы, бындай китаптарҙы донъяның теләһә ҡайһы мөйөшөнән һатып алып, уҡып була. Нәшриәттә электрон китаптар сығарыуҙы ойоштороғас, уларҙы сайтыбыҙға урынлаштырҙыҡ. Шыттыра тип уйламағыҙ: баҡтиһәң, беҙҙең китаптарҙы һатып алырға теләүселәр Австралияла ла бар икән. Көнбайыш илдәрендәге уҡыусыларыбыҙ тураһында әйтеп тә тормайым. Башҡортостанда тыуып, үҫеп, сит илгә киткән милләттәштәребеҙ, милли матбуғатыбыҙҙы, художестволы әҙәбиәтебеҙҙе уҡырға теләп, беҙҙең сайтҡа юлаға ла, электрон китапты һатып алып, күңелен баҫа икән. Хатта ҡайһы бер китапханалар ҙа беҙҙең менән хеҙмәттәшлек булдырҙы. Мәҫәлән, Германиялағы бер китапхана даими рәүештә беҙҙә баҫылған китаптарҙы һатып ала. Был - бер. Икенсенән, электрон китаптар кәрәкме? Әлбиттә! Сөнки, был китаптар күсереп йөрөтөүгә, юлда уҡыуға шул тиклем уңайлы. Шулай ҙа улар кешенең, айырыуса балаларҙың күҙенә зыян килтерә. Уларҙы бер туҡтауһыҙ уҡыу һаулыҡ өсөн хәүефле. Бала китапты ҡағыҙҙан уҡырға тейеш. Был йәһәттән электрон китаптар ҡағыҙ китаптарҙан ҡалыша. Әммә беҙҙә электрон китаптар ҙа, ҡағыҙ китаптар ҙа булырға тейеш.

**Илһам Йәндәүләтов:** Беҙ йылына 10-12 электрон китап сығарабыҙ. Сығарабыҙ ҙа, осоҙ ғына хаҡ ҡуйып, үҙебеҙҙең сайтҡа урынлаштырабыҙ. Сайтҡа ингән уҡыусы үҙенә уңайлы түләү ысулын һайлай ҙа, бер-нисә минут эсендә электрон китапты һатып та ала. Бер уйлаһаң, был еп-еңел эш. Әммә электрон китаптар менән ҡыҙыҡһыныусылар бик әҙ. Шуға әле уларҙың ҡағыҙ китаптарҙы ҡыҫырыҡлап сығарыуы тураһында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел. Киләсәктә, әлбиттә, электрон китаптар күберәк сығыр һәм таралыр тип күҙаллайым.. Минең уйымса, улар икеһе лә параллель рәүештә үҫешергә тейеш. Әлегә яҙыусыларҙың күбеһе бындай китаптар сығарыуға психологик яҡтан әҙер түгел. Был турала һөйләшһәң, улар: "Электрон китаптарымды уҡыусыларыма нисек күрһәтергә тейешмен, уларҙы бүләк итә лә алмайым бит?"- тигәнерәк һорау ҡуя. Уларҙы ла аңларға була.

Мин яңыраҡ Германияла булғайным. Унда Майндағы Франкфурт ҡалаһында йыл һайын китап йәрминкәһе үтә. Йөҙгә яҡын илдән бик күп нәшриәттәр үҙҙәренең продукцияһын күргәҙмәгә ҡуйған. Мин уларҙың күбеһе менән танышып сыҡтым. Баҡтиһәң, алға киткән Көнбайыш илдәре, электрон китаптар этабын үтеп, уның етешһеҙлектәрен аңлап, кире ҡағыҙ китаптарға ҡайтып яталар икән. Японияла ла шул уҡ хәл. Ә беҙ, ул илдәрҙән 10-15 йылға арттараҡ ҡалып, улар баҫҡан "тырмаға" баҫырға итәбеҙ һымаҡ килеп сыға.

**Халыҡтың зауығы тураһында һөйләшәйек әле. Китап һайлау мәсьәләһенә туҡталғанда, халыҡ ниндәй китаптарға өҫтөнлөк бирә? Уҡыусының күңел талабы ниндәй?**

**Илһам Йәндәүләтов:** Был һорауға аныҡ ҡына яуап биреп булмай. Кемгәләр - детектив, кемгәләр - мөхәббәт, кемгәләр балалар әҙәбиәте жанрҙары кәрәк. Дөйөмләштереп, башҡорт китабы тураһында әйткәндә, балалар әҙәбиәте һәм нәфис әҙәбиәт ҙур һорау менән файҙалана. Балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәрҙе теләп алалар. Ата-әсә бер ваҡытта ла кескәйҙәре өсөн китапҡа аҡса йәлләмәй. Сөнки, бәләкәйҙән китап уҡып үҫһә, балам киләсәктә аҡыллы һәм яҡшы кеше буласаҡ, тигән инаныу бар әле ата-әсәләрҙә. Башҡорт прозаһы ла уҡыусылар араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Беҙҙең билдәле яҙыусыларыбыҙ бар - уларҙың сәсмә әҫәрҙәрен бик теләп һатып алалар. Фәнни-популяр стилдә яҙылған әҙәбиәткә, тәбиғәт, тарих тураһындағы китаптарға ла ихтыяж ҙур. Республиканан ситтә йөрөһәк, башҡорт халҡының тарихы тураһындағы китаптар менән бик ҡыҙыҡһыналар. Яңыраҡ Ғәлим Афзал улының ярҙамы менән башҡортса Ҡөрьән Кәримде яңынан баҫтырҙыҡ. Шул китапты, ғөмүмән, Ислам дине буйынса әҙәбиәтте ныҡ һорайҙар. Һуңғы ун йылда дини китаптарға иғтибар бермә-бер көсәйҙе. Мосолман календары, көн дә кәрәкле доғалар ҙур һорау менән файҙалана.

**Яҙыусының бурысы, уның китапты китап итер өсөн һалған көсө нимәлә?**

**Ғәлим Хисамов:** Яҙыусы, әлбиттә, беренсе сиратта, яҙғандарын китап итеп сығарыу маҡсатын алға һөрә. Ул үҙенең фекерен кешеләргә еткереү ысулы ошо китап аша икәнен бик яҡшы белә. Әлбиттә, яҙыусылар ҙа төрлө-төрлө: уның береһе - яҡшыраҡ, икенсеһе ҡайтышыраҡ яҙа. Шуға күрә, китаптар ҙа төрлө-төрлө: һәйбәте бар, йығылып ятып уҡый торғаны бар, уҡылмай торғаны ла бар. Тимәк, китап нәшриәте беренсе сиратта яҙыусыларға талапты арттырырға тейеш. Бер-нисә китабын сығармайынса, ҡулъяҙмаларҙы кире ҡайтарһа, яҙыусы икенсе төрләрәк яҙа башлаясаҡ. Әле тарих тураһында әйтелдә. Тарихи китаптарҙы, һис шикһеҙ, яҙырға кәрәк. Башҡорт тарихынан да ҙурыраҡ тарихлы халыҡ беҙҙең илдә бүтән бармы икән әле! Бына ошо тарихты яҙыусы ҡағыҙға күсерергә тейеш. Бер тарихсы ғына эшләп бөтөрә алмай был эште. Тарихсы яҙған тарих менән яҙыусы яҙған тарих, бер үк факт тураһында яҙылһа ла, икеһе ике әйбер. Ошо арала мин яҙыусыларға бер тәҡдим яһаным:"Әйҙә, прозаиктар, төрлө темаларҙы, төрлө документтарҙы бүлешеп алайыҡ һәм коллектив рәүештә китап барлыҡҡа килтерәйек", - тинем. Әле беҙ 25 кешенән торған төркөм барлыҡҡа килтерҙек. Алла бирһә, яҡын арала ошондай китаптар сығарасаҡбыҙ.

Әлбиттә, китапҡа ҡағылышлы тағын бер уй: яҙыусы йөҙәр йыл артҡа ҡарарға һәм йөҙәр йыл алдағыһын күрергә тейеш. Шул ваҡытта ғына ул яҙыусы була. Әгәр ҙә ул үткәндәрҙе генә байҡап, алдағыһын күрмәһә, йә алға ғына ҡарап, үткән тарихты күрмәһә, яҙыусы була алмай. Ундай яҙыусы халыҡҡа кәрәкмәй. Беҙҙең башҡорт китабы ла халҡыбыҙҙың үткән тарихын да сағылдырырға, киләсәген дә төҫмөрләргә тейеш. Шул ваҡытта башҡорт китабы мәңге буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө һөйләшеүҙең һығымтаһы ҡунаҡтарыбыҙ тарафынан бик аныҡ әйтелде: китап - халыҡты халыҡ итеп тотҡан, уны алға әйҙәгән ҡорал. Заман үҙгәрә килә, ҡорал да үҙ формаһын үҙгәртергә мөмкин, әммә эстәлеге үҙгәрмәй. Ул һәр ваҡыт бер маҡсатҡа - телде, мәҙәни байлыҡтарҙы һаҡлауға хеҙмәт итә, киләсәктә лә хеҙмәт итһен.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

***✓ Төлкө: Нисек тип ни, баяғыса инде. Мин хәҙер хакер ҡомаҡты саҡырам да, директорҙың компьютерының кодын емереп инеп, анкета һорауҙарын алабыҙ. Бер кем дә һиҙмәй ҡаласаҡ.***





# КЕМ ҠАРҺЫЛЫУ БУЛА?

## Йәки Төлкөбикәнең далаға ҡыуылыуы

**Өс күренештә**

**ҠАТНАШАЛАР:**
**Айыу**
**Бүре**
**Төлкөбикә**
**Ат**
**Һарыҡ**
**Ҡуян**
**Өкө**
**Торна**
**Айса Ғайса улы - мәктәп директоры**
**Утбикә, Нурбикә, Матурҡай, Наҙлыҡай, Ҡараҡай - конкурста ҡатнашыусы ҡыҙҙар**
**Ҡыш бабай**
**Ҡомаҡ - хакер**

### БЕРЕНСЕ КҮРЕНЕШ

***Матур итеп биҙәлгән шыршы. Уның янында уҡыусылар, йәнлектәр гөж килә. Мәктәп директоры Айса Ғайса улы барыһын да теҙеп ҡуйып, ҡулындағы ҡағыҙға ҡарап һүҙ башлай.***

**Айса Ғайса улы:** Ҡәҙерле балалар! Иртәгә үтәсәк Яңы йыл байрамына әҙерләнеү буйынса яңы фарманымды уҡып ишеттерәм. Иғтибар менән тыңлағыҙ!

Фарман

Яңы йыл кисәһенең юғары кимәлдә үтеүе күп йәһәттән Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙың әҙерлекле булыуына, үҙен нисек тотошона бәйле. Былтыр Ҡыш бабайға конкурс үткәрһәк, быйыл Ҡарһылыу булырға теләүсе ҡыҙҙарҙың күп булыуын иҫәпкә алып, мәктәп дирекцияһы Ҡарһылыуға кастинг иғлан итә. Уның шарты буйынса конкурсҡа ҡатнашыусы ҡыҙҙарҙың араһынан иң-иңе һайлап алынып, байрамда Ҡарһылыу булып ҡатнашыу хоҡуғына эйә буласаҡ. Жюри түбәндәге составта билдәләнә:

Бүре - жюри рәйесе
Төлкөбикә - сәркәтиб
Айыу - жюри ағзаһы
Ҡуян - жюри ағзаһы
Өкө - жюри ағзаһы
Торна - жюри ағзаһы
Ат - жюри ағзаһы
Һарыҡ - жюри ағзаһы

Конкурс иртәгә таңғы 8-ҙә, йәғни Яңы йыл байрамына бер сәғәт ваҡыт ҡалғас үткәрелә. Беҙ мәктәп уҡыусылары менән берлектә конкурста ҡатнашыусыларға анкета һорауҙары әҙерләнек. Ул һорауҙарға дөрөҫ һәм тулы яуап биреүселәр еңеүсе тип иғлан ителәсәк. Һорауҙар минең компьютерҙа йыйылған, әҙер. Иртәгә уларҙы ҡағыҙға баҫтырып, конкурста ҡатнашыусыларға өләшеп бирәбеҙ.

Барыһы ла аңлашылдымы, уҡыусылар? Кемдә ниндәй һорауҙар бар?

**Утбикә:** Айса Ғайса улы, һеҙгә бер һорау бирергә мөмкинме?

**Айса Ғайса улы:** Мөмкин, ниндәй һорауың бар һуң, Утбикә?

**Утбикә:** Ә һеҙ конкурста ҡатнашыусыларҙың буй-һынына, үҙен нисек тотошона, төҫ-башына бөтөнләй иғтибар итмәйһегеҙме ни, Айса Ғайса улы? Беҙ анкета һорауҙарына ғына яуап бирәбеҙме ни? Мине һәм ҡыҙҙарҙы ошо мәсьәлә борсой.

**Айса Ғайса улы:** Һорау бик урынлы. Ҡыҙҙар, беренсенән, Ҡарһылыу конкурсы Өфөлә үткән "Һылыуҡай" конкурсынан күпкә айырыла, йәғни беҙ ҡыҙҙарҙың һылыулығын тикшермәйбеҙ. Икенсенән, һин әйткән күрһәткестәр буйынса был конкурста беҙҙең мәктәптә уҡыған һәр ҡыҙ бала ҡатнашырлыҡ. Шулай бит, Бүре туған?

**Бүре:** Һүҙегеҙ хаҡ, Айса Ғайса улы! Тап шулай! Беҙҙең ҡыҙҙар донъялағы иң матурҙары, иң тәмле... Әй, яңылыштым... Иң йәмлеләре. Мин, ҡулымдан килһә, улар араһында "Иң матур Ҡыҙыл ҡалпаҡ" тигән конкурс та үткәрер инем.

**Айса Ғайса улы:** Яҡшы. Ә бына Айыу туған нимә уйлай?

**Айыу:** Бүренең һүҙе хаҡ, Айса Ғайса улы! Телевизорҙан "Маша менән Айыу" мультигында алдап күрһәтәләр, йәнәһе, Маша мине ыҙалата, тиеп. Беҙҙең ҡыҙҙар - иң шәбе!

**Төлкөбикә:** Беҙҙең ҡыҙҙармы... Айса Ғайса улы... "Мисс-элегантес", "Мисс-галантес", "Мисс-төлкөбикс" конкурстарында ҡатнашырлыҡ. Утбикәнең һорауына яуабым шулай: мин, иң гәҙел жюри ағзаһы булараҡ, һылыулыҡ, һомғоллоҡ, нәзәкәтлек йәһәтенән хәҙер үк барлыҡ ҡатнашыусыларға лайк... эй, яңылыш әйттем... 10-шар балл ҡуям!

**Ат:** Иһо-һо, кем, Төлкөбикә, атмаған ҡуяндың тиреһен тунамай торайыҡ әле. Әле конкурс башланмаған-нитмәгән...

**Ҡуян:** Ниңә, әллә Яңы йыл кисәһендә минең тиремде тунарға итәһегеҙме? Улайһа, ике байрамға аяғымдың береһен дә баҫмаясаҡмын. "Эләгерһең әле!" мультигы хәҙер модала түгел. Шулай бит, Бүре ағай?

**Бүре:** Һе! Тап шулай. Беҙ хәҙер Ҡуян менән дуҫлаштыҡ. Океан аръяғынан арзанға Буш боттары килгән саҡта мин мәңге тоттормаҫ шешҡолаҡ артынан йүгереп йөрөргә алйоттор шул...

**Төлкөбикә:** Һарыҡ итенән дә баш тартаһыңмы ни, Бүре ағаҡай?

**Бүре:** Бүренең ауыҙы ашаһа ла ҡан, ашамаһа ла ҡан. Мин күптәндән вегетариан, Мәжит Ғафури "Һарыҡты кем ашаған?" мәҫәлендә Һарыҡты Ҡуян ашаны, тип, уға хөкөм сығарһа ла, йәшерен фекерендә барыбер минә ишара бар.

**Ҡуян:** Тағы ла шул бер үк балыҡ башы...

**Һарыҡ:** Бүре вегетариан булғандан алып беҙҙең тоҡом ныҡ ишәйҙе. Йән шатлана шуға.

**Өкө:** Ух-х-х-х-х... *(көлә).*

**Торна:** Тор-рыйыҡ, тор-рыйыҡ, талашмай торайыҡ!

**Төлкөбикә:** Һинә, Торнаҡай, бөтөнләй һүҙ бирелмәгән. Һин вапшы ялҡауға әйләндең. Күптәнән йылы яҡҡа осоп китергә тейеш инең...

**Торна:** Хәҙер климат үҙгәрҙе. Ҡыштар ҙа йылы килә. Беҙ борон-борондан башҡорттар төйәк иткән Уралтауҙа тиҙҙән йыл әйләнәһенә йәшәйәсәкбеҙ...

**Төлкөбикә:** Селлә инһә, күрмәгәнеңде күрерһең әле...

**Торна:** Күп мыжыһаң, ҡунаҡҡа саҡырһам, ашты тағы ла тар муйынлы көршәккә ҡойоп бирәм...

**Төлкөбикә:** Ә мин - йәйпәк тәрилкәгә...

**Айса Ғайса улы:** Әкиәттә талашыуығыҙ етмәнеме? Шаярттыҡ та, шуның менән бөттө, хөрмәтле уҡыусылар, ҡәҙерле йәнлектәр. Иртәгә байрам ғына түгел, жюри ағзаларын һәм конкурста ҡатнашыусы ҡыҙҙарҙы яуаплы эш көтә. Һәр кем үҙ эше менән була. Хәҙер таралашһағыҙ ҙа була...

### ИКЕНСЕ КҮРЕНЕШ

***Барыһы ла таралыша. Шыршы эргәһе бер аҙға бушап ҡала. Ҡараңғылыҡ төшә. Шыршы янында Төлкөбикә менән Утбикә пәйҙә була. Улар ян-яғына ҡаранып, шыбырҙап ҡына һөйләшә.***

**Утбикә:** Шунан, нисек килешәбеҙ, Төлкөбикә апай? Даны - минә, малы һинәме?

**Төлкө:** Нисек тип ни, баяғыса инде. Мин хәҙер хакер ҡомаҡты саҡырам да, директорҙың компьютерының кодын емереп инеп, анкета һорауҙарын алабыҙ. Бер кем дә һиҙмәй ҡаласаҡ. Уның ҡарауы, Утбикә, һин Ҡарһылыу буласаҡһың, ә минә берәр ҡаҙмы, өйрәкме шунда, тигәндәй...

**Утбикә:** Быйыл әсәйемдәрҙең ҡаҙы ла, өйрәге лә уңды. Хет икеһен дә бирергә була. Уныһы минән ҡалмаҫ. Эх, әхирәттәремдең танауына сиртәсәкмен. Белгегеҙ килһә, Төлкөбикә апай, мин иртәнсәк...

**Төлкө:** Улай уҡ шашынма, ҡысҡырма, һеңлем, иртә ҡысҡырған әтәстең кикереге шиңә...

**Утбикә:** Ярар, улайһа ҡасан һорауҙар минең ҡулда буласаҡ, Төлкөбикә апай? Миңә ҡасан, ҡайҙа килергә?

**Төлкөбикә:** Ярты сәғәттән, тап ошо урында...

**Утбикә:** Килештек, бер аяғым тегендә, икенсеһе - бында...

***Утбикә сыға. Төлкөбикә кемдәлер эҙләп, шыршыны уратып йөрөй башлай.***

**Төлкөбикә:** Ҡомаҡ, тим, ҡайҙа һин, ҡайҙа, тием? Беҙ ошонда осрашырға һүҙ ҡуйыштыҡ түгелме?

***Ҡомаҡ шыршы эсенән килеп сыға.***

**Ҡомаҡ:** Мин күптәндән алып бында, Төлкөбикә апай. Бына шыршы араһына инеп ятып торғайным, ойоп киткәнмен. Ни йомош?

**Төлкөбикә:** Йомош, тип, Ҡомаҡ дуҫ, йомош та түгел инде. Бәләкәй генә мәшәҡәт...

**Ҡомаҡ:** Тыңлайым, Төлкөбикә апай...

**Төлкөбикә:** Шым, ипләп. Бында оҙонғолаҡтар, үткер күҙҙәр тулып йөрөй. Директорҙың мәғлүмәттәр базаһына инә алаһыңмы?

**Ҡомаҡ:** Һә, тигәнсе. Шунан, унда нишләргә? Ниндәй мәғлүмәт алырға?

**Төлкөбикә:** Ни бары бер генә бит. Иртәгә үтәсәк Ҡарһылыу конкурсына анкета һорауҙары һәм уларға яуаптар...

**Ҡомаҡ:** Шул ғынамы? Хәҙер, Төлкөбикә апай, ер аҫтындағы кәнсәмә генә төшәйем дә. Унда ноутбугым да бар.

***Ҡомаҡ китә бирә лә, нимәлер иҫенә төшөп, кире боролоп килә.***

**Ҡомаҡ:** Уңайһыҙ булһа ла һорайым инде, Төлкөбикә апай. Ә әжеренә нимә буласаҡ?

**Төлкөбикә:** Әжер тиһеңме? Уныһы нимә тағы?

**Ҡомаҡ:** Минең хеҙмәтем нисек баһаланыр, тием?

**Төлкөбикә:** Шулай тиген. Атыу, әжер, имеш. Шуны эшләһәң, минән һинә бер тоҡ бойҙай...

**Ҡомаҡ:** Бына быныһы егеттәрсә, Төлкөбикә апай...

**Төлкөбикә:** Мин һинә егеттер шул...

**Ҡомаҡ:** Улай булғас, ҡыҙҙарса, Төлкөбикә апай...

**Төлкөбикә:** Күп һөйләнмә, Ҡомаҡ, юғиһә кире уйлауым бар!

**Ҡомаҡ:** Остом...

***✓ Барыһы ла гөр килеп ҡул саба. Нурбикәне ҡотлайҙар. Ҡарһылыу кейемендәге Утбикә шыршы тирәләй сәбәләнеп йүгерә башлай. Ул өҫтөндәге кейемен сисергә теләмәй үрһәләнә.***



***Ҡомаҡ бер яҡҡа, Төлкөбикә икенсе яҡҡа китә. Шыршы янына Өкө менән Торна килеп инә.***

**Өкө:** Бына нимә эшләргә йөрөй был Төлкөбикә. Төн ҡараңғы булһа ла, кешегә күренмәй генә хаслыҡ ҡылырға самалайҙар. Нимә эшләргә, Торна дуҫ?

**Торна:** Кисекмәҫтән Төлкөбикәнең был эшлеге хаҡында директорға еткерергә кәрәк.

**Өкө:** Ваҡыт үтәсәк бит. Етмәһә, Айса Ғайса улының йәшәгән йорто бик алыҫ. Шылтыратырға телефонды ла өйҙә ҡалдырғанмын. Беҙ унда тәпәй-тәпәй барып еткәнсе, Ҡомаҡ директорҙың мәғлүмәт сайтын ватасаҡ...

**Торна:** Ниңә тәпәй-тәпәй тиһең? Хоҙай миңә миңә ҡанат биргән һуң?

**Өкө:** Осор өсөн...

**Торна:** Шулай булғас һуң, һин хәҙер үк Ҡомаҡты ҡыуып ет тә, һүҙгә әүрәтеп, ваҡытты һуҙ. Ер аҫты кәнсәһенә бер төшөп китһә, ҡабат сығарырмын тимә. Мин хәҙер Айса Ғайса улының йортона йәһәт кенә барып киләм.

***Торна осоп китә. Өкө Ҡомаҡ артынан сығыу яғына бара.***

**Өкө:** Ҡомаҡ дуҫ, тороп тор әле. Бер генә минутҡа. Тик бер генә һүҙ әйтәм...

***Ҡомаҡ кире боролоп килә.***

**Ҡомаҡ:** Бик ҡабаланып китеп бара инем. Һүҙеңде әйт тә, ваҡытым бик тар...

**Өкө:** Кисә урманда бер хәбәр ишетеп ҡайттым бит әле, Ҡомаҡ дуҫ!

**Ҡомаҡ:** Ишетһәң һуң... Бөткәнме ни хәбәр һөйләүсе... Ярар, мин ҡабаланам, киттем...

***Ҡомаҡ китергә йыйына.***

**Өкө:** Һүҙ һөйләүсе бөтмәгән. Әммә бында һүҙ һинең хаҡта, дөрөҫөрәге, һинең балаларың хаҡында бара...

***Ҡомаҡ китергә йыйынған еренән туҡталып ҡала.***

**Ҡомаҡ:** Балаларым хаҡында? Кем? Нишләргә итә минең балаларымды? Әйт, хәҙер елкәһен сәйнәп өҙәм уның...

**Өкө:** Яуыз ҡарһаҡтарҙың этлеге был. Улар ҡайҙандыр бик зәһәр сысҡан дарыуы, йәғни ағыуы табып, үҙ-ара һөйләшә инеләр...

**Ҡомаҡ:** Ҡарһаҡтар? Вәт яуыз йәндәр. Нимә тиҙәр һуң улар?

**Өкө:** Яңы йылда Ҡыш бабайҙың ҡомаҡ балаларына өләшкән бойҙай араһына шул дарыу... эй, ағыуҙы һалып, ҡомаҡтарҙың затын ҡоротабыҙ, тиҙәр...

**Ҡомаҡ:** Үәт хәсис йәндәр! Мин уларҙың арт һабағын уҡытасаҡмын. Ағыуҙарын үҙҙәренә һоғондорасаҡмын. Хәҙер бына Төлкөбикә дуҫым киләсәк. Унан кәңәш һорайым да...

**Өкө:** Ҡарһаҡтарҙы Төлкөбикә яҡшы белә инде ул. Хәйер, ана килә. Ярар, хуш, мин китәйем инде.

***Өкө сыға. Бер аҙҙан Төлкөбикә инә.***

**Төлкөбикә:** Шунан, нисек, булдымы беҙҙең эш?

**Ҡомаҡ:** Өлгөрмәнем. Кәнсәгә төшмәгәнмен әле. Хәлдәр хөрт, Төлкөбикә апай. Урмандан насар хәбәр килде!

**Төлкөбикә:** Урмандан килгән юҡ-бар хәбәргә ҡолаҡ һалыр ваҡытмы? Бизнесыбыҙ яна бит. Һинең бер тоҡ бойҙайың яна...

**Ҡомаҡ:** Хәбәр килде: урманда ҡарһаҡтар йыйылышып һөйләшкән. Ҡайҙандыр зәһәр сысҡан ағыуы тапҡандар улар. Шул ағыуҙы иртәгә Ҡыш бабай минең балаларға таратасаҡ бойҙайға ҡушмаҡсылар икән. Бәлә бит был, Төлкөбикә апай!

**Төлкөбикә:** Был әкиәтте һиңә кем һөйләне?

**Ҡомаҡ:** Әле генә Өкө һөйләп китте. Үҙ ҡолағы менән ишеткән. Ысын...

**Төлкөбикә:** Уның һүҙенә ышанған һин алйот. Бәлки, урмандағы башҡа йәнлектәр уға ҡарһаҡтар булып күренгәндер.

**Ҡомаҡ:** Нисек башҡа йәнлектәр?

**Төлкөбикә:** Һуң, бынан ярты быуат элек урмандағы барлыҡ йәнлектәр, шул иҫәптән айыуҙар, бүреләр һәм төлкөләр берләшеп, ҡарһаҡтарҙы кире далаһына ҡыуып сығарҙыҡ бит инде. Хәҙер Уралда уларҙың аты-юлы юҡ. Алдаған һине Өкө...

**Ҡомаҡ:** Уға мине алдап ни файҙа?

**Төлкөбикә:** Файҙаһын үҙе беләләр инде. Юҡҡа башыңды ҡатырма, Ҡомаҡ дуҫ, бар йүгер кәнсәңә. Хәҙер беҙҙең клиент килеп етә...

## ӨСӨНСӨ КҮРЕНЕШ

***Шыршы янында балалар йыйылған. Өҫтәл артында жюри ағзалары: жюри рәйесе Бүре, сәркәтип Төлкөбикә, ағзалар Айыу, Ҡуян, Ат, Торна, Өкө, Һарыҡ.***

**Айса Ғайса улы:** Ҡәҙерле балалар! Ҡарһылыу конкурсы башлана! Конкурста ҡатнашыусы ҡыҙҙар шыршы янына рәхим итегеҙ!

***Бер-бер артлы теҙелеп, Утбикә, Нурбикә, Матурҡай, Наҙлыҡай, Ҡараҡай шыршы янына сыға. Барыһының да иғтибары Утбикәлә. Ул Ҡарһылыу кейемендә.***

**Айыу:** Утбикә һеңлем, һин ниңә конкурс үтмәҫ элек Ҡарһылыу кейемендә? Иртәрәк түгелме?

**Бүре:** Мин дә уның был кейемдә конкурста ҡатнашыуына ҡаршымын...

**Төлкөбикә:** Кейһен һуң. Кем белә, бәлки, ул конкурста еңеп сығырына ныҡ ышаналыр...

**Утбикә:** Мин үҙемде хәҙер үк Ҡарһылыу итеп тоям. Дөрөҫөрәге, барыбер еңеп сығасаҡмын...

**Айса Ғайса улы:** Кем берәү әйтмешләй, эш самауырҙа түгел, эш кейемдә. Тик, ҡара уны, Утбикә, әгәр ҙә конкурста еңә алмаһаң, ояты үҙеңә...

**Айыу:** Ояттың да ниндәйе бит әле...

**Утбикә:** Мин барыбер еңәсәкмен. Төшөмдә күрҙем...

**Төлкөбикә:** Төштәр юш килә ул...

**Айса Ғайса улы:** Беҙ ваҡытты үлтерәбеҙ, конкурсҡа бер сәғәт кенә бирелгән. Конкурс башлана. Айыу туған, анкеталарҙы ҡыҙҙарға таратып бирегеҙ!

**Айыу:** Һеңлекәштәрем, бына был ултырғыстарға ултырышығыҙ. Хәҙер һеҙгә анкеталар таратып сығабыҙ. Уларға яуап яҙыр өсөн 15 минут ваҡыт бирелә.

***Утбикә, Нурбикә, Матурҡай, Наҙлыҡай, Ҡараҡай ултырғыстарға урынлаша. Уларға Айыу анкета таратып сыға. Төлкөбикә уның әҙенә тығылырға итә, әммә Айыу уны ситкә этеп ебәрә.***

**Айыу:** Һинең эшең протокол яҙыу, Төлкөбикә. Кит бынан!

**Төлкөбикә:** Айса Ғайса улы, Айыу мине жюри эшендә ҡатнашыуҙан ситләштереп маташа. Зинһар, ярҙам итегеҙ!

**Айса Ғайса улы:** Айыу хаҡлы, Төлкөбикә, һинең эшең протокол яҙыу. Һәр кем үҙ эшен башҡара. Ҡыҙҙар анкеталарҙы тултырған арала, балалар, шыршы тирәләй әйләнеп, йырлашып-бейешеп алабыҙ. Ҡыш бабайҙы ҡаршыларға әҙерләнәбеҙ...

***Төлкөбикә үҙ урынына барып ултыра. Конкурста ҡатнашыусы ҡыҙҙар эшкә тотона. Тирлә битлектәр кейгән балалар шыршы тирәләй әйләнеп, йырлашып-бейешә башлай. Күмәкләп күңел асыу байтаҡ ваҡыт дауам итә. Бына бер мәл Утбикә урынынан тороп, яҙма эшен жюри өҫтәленә килтереп һала. Башҡа ҡыҙҙар ҙа уның артынан эйәрә.***

**Айса Ғайса улы:** Ҡыҙҙар анкета һорауҙарына яуап бирҙе. Жюри уларҙы тикшереп сығып, хөкөмөн сығарғансы, ҡыҙҙар, һеҙ ҙә дөйөм түңәрәккә ҡушылығыҙ!

***Жюри ағзалары үҙ эшенә тотона. Ҡыҙҙар шыршы тирәләй әйләнеүсе балаларға ҡушыла. Ҡарһылыу кейемендәге Утбикә үҙен бик эре тотоп, иғтибар үҙәгендә булырға тырышҡаны күренеп тора. Жюри үҙ эшен тамамлауға, музыка тынып ҡала.***

**Бүре:** Хөрмәтле йәмәғәт! Беҙ үҙ эшебеҙҙе тамамланыҡ. Хәҙер һеҙгә анкета һорауҙарына яуаптарҙың һөҙөмтәһен уҡып ишеттерәбеҙ. Шулай итеп, анкетаға түбәндәге 10 һорау ҡуйылғайны. Һорауҙар Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына һәм күренекле шәхестәребеҙҙең ижад һәм тормош юлына бәйле юҫыҡта төҙөлгән.:

1. Сталин "Бер аҙым да артҡа сикмәҫкә!" тигән киң билдәле фарманын кемдең кәңәше буйынса иғлан итә?
2. Башҡорт кавалерия дивизияһының нисә яугирына Советтар Союзы Геройы исеме бирелгән?
3. Башҡорт халҡының ҡайһы улына ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы исеме бирелгән? Ул ниндәй районың ҡайһы ауылында тыуып үҫкән?
4. Бер минаның бер ярсығы - Мостай Кәримгә, икенсеһе кемгә тейә?
5. Ниндәй ҡатын-ҡыҙ яҙыусының ҡайһы романын белмәйенсә тороп, башҡорт халҡының үткәнен белеп булмай?
6. Башҡорт халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева ниндәй ырыуҙан?
7. Кем ул Мәғүбә Сыртланова?
8. "Бындай йырҙар баҫып йырланыла, бындай йырҙар ултырып йырланмай..." тигән шиғри юлдарҙы ҡайһы шағирә яҙған?
9. Яҙыусы Мәрйәм Бураҡаеваның кесе ҡыҙының исеме кем?
10. Шағир Рәйес Түләк үҙенең поэмаһында ниндәй башҡорт ҡатын-ҡыҙының яҙмышын һүрәтләй?

Анкета һорауҙарына яуаптарҙы түбәндәгесә итеп бирҙеләр:

Нурбикә 10 һорауға ла дөрөҫ яуап биргән, Наҙлыҡай 9 һорауға, Матурҡай - 7, Ҡараҡай 5 һорауға дөрөҫ яуап ҡайтарған. Утбикәнең бер яуабы ла дөрөҫ түгел. Конкурс шарттары буйынса 10 һорауға ла дөрөҫ яуап биргән Нурбикә Ҡарһылыу итеп һайлана!

***Барыһы ла гөр килеп ҡул саба. Нурбикәне ҡотлайҙар. Ҡарһылыу кейемендәге Утбикә шыршы тирәләй сәбәләнеп йүгерә башлай. Ул өҫтөндәге кейемен сисергә теләмәй үрһәләнә.***

**Утбикә:** Юҡ, минең яуаптарым барыһы ла дөрөҫ ине. Мине күрәлмәйһегеҙ, шуға юрый аяҡ салаһығыҙ! Мин һеҙҙе судҡа бирәсәкмен...

**Бүре:** Барыһы ла законлы рәүештә башҡарылды. Ышанмаһағыҙ, һәр бер яҙма эште үҙегеҙ тикшереп сығығыҙ. Беҙ һеҙҙең күҙ алдында асыҡтан-асыҡ конкурс эштәрен ҡараныҡ.

**Өкө:** Айса Ғайса улы, бәлки, барыһын да хәҙер үк әйтеп һалырғалыр...

**Торна:** Мин дә шулай уйлайым, нимәгә һуҙырға? Яуызлыҡ үҙ мәлендә фашланырға тейеш...

***Ошо саҡ Төлкөбикә шыпырт ҡына сығыу яғына ынтыла. Уның юлын Айыу быуа.***

**Айыу:** Ҡайҙа ашығаһың, Төлкөбикә, әле кәнсирт башланманы...

**Төлкөбикә:** Балаларым асығып ултыра. Кәнсирт ҡуйып йөрөп, уларҙы астан үлтергем килмәй...

**Айса Ғайса улы:** Ярай, Төлкөбикә, хәҙер протоколға һиңә ҡул ҡуй ҙа, балаларың янына ҡайтырһың. Хөрмәтле жюри ағзалары протоколға ҡул ҡуйһын.

**Төлкөбикә:** Был - саботаж, диверсия! Беҙҙең араға дошман ингән. Мин протоколға ҡул ҡуйыуҙан баш тартам!

**Айыу:** Ҡуймау түгел ҡуйырһың!

**Айса Ғайса улы:** Улайһа, кисә нимә булғанын бөтөн ғәм алдында һөйләп бирәбеҙ...

**Төлкөбикә:** Төлкө башым менән һеҙҙең һүҙегеҙҙән ҡурҡып тормам. Мәйелегеҙ! Миңә барыбер һеҙҙең менән бергә йәшәргә түгел.

**Айса Ғайса улы:** Өкө, Торна туғандар, һөйләгеҙ кисә нимә булғанын. Оята - үҙеңә, ғибрәте - башҡаларға...

**Утбикә:** Зинһар өсөн, Айса Ғайса улы, Төлкөбикә апай урманына китә лә бара. Миңә бит ошо мәктәптә уҡырға...

**Матурҡай:** Яуызлыҡ фашланырға тейеш, беҙ, Утбикә, һинең мутлыҡтарыңды былай ҙа белә инек!

**Ҡараҡай:** Беҙ уның ни эшләгәнен белергә теләйбеҙ!

**Наҙлыҡай:** Минең дә белгем килә...

**Нурбикә:** Һөйләмәһәгеҙ, мин Ҡарһылыу булыуҙан үҙем баш тартам!

**Айса Ғайса улы:** Улайһа, Утбикә Төлкөбикә менән кисә ни ҡылғандарын үҙҙәре һөйләп бирһен!

**Утбикә:** Ғәфү итегеҙ, хөрмәтле туғандар! Ҡыҙҙар! Мин Төлкөбикәнең мәкерле ҡармағына ҡаптым. Ул хакер Ҡомаҡты саҡырып, Айса Ғайса улының компьютерындағы сайтҡа ватып инеп, анкетаның һорауҙарына әҙер яуаптарҙы миңә алып биргәйне...

**Өкө:** Ә беҙ һеҙҙең этлек ҡылырға йөрөгәнегеҙҙе белеп ҡалдыҡ...

**Торна:** Мин Айса Ғайса улының өйөнә осоп барҙым да, барыһын да һөйләп бирҙем. Шунан һуң беҙ уларҙың үҙҙәрен хәйлә тоҙағына ҡаптырҙыҡ?

**Төлкөбикә менән Утбикә икеһе бер юлы:** Нисек?

**Айса Ғайса улы:** Анкета һорауҙарының яуаптарын дөрөҫ булмаған яуапҡа алыштырҙыҡ...

**Төлкөбикә менән Утбикә икеһе бер юлы:** Ах, бына нисек...

**Өкө:** Һеҙ беҙҙе алдарға уйланығыҙ ҙа, үҙегеҙ алданып ҡалдығыҙ. Үәт!

**Айыу:** Хөрмәтле, йәмәғәт, беҙ бына Бүре туған менән үҙ-ара кәңәшләшеп алдыҡ та, йәнлектәрҙең хөкөмөн сығарҙыҡ һәм Төлкөбикәне аты-заты менән ҡарһаҡтар артынан далаға ҡыуыу турһында ҡарар сығарҙыҡ!

**Бүре:** Төлкөбикә, һиңә йәнлектәр 24 сәғәт эсендә Уралтауҙы ташлап китергә ваҡыт бирә! Юғал күҙебеҙҙән! Беҙгә һинең өсөн кешеләр алдында оят!

**Төлкөбикә:** Мин булмағас, сысҡандарығыҙҙы кем тотор? Сысҡан бизгәге ауырыуы таралып, ҡырыла башлағас, мине иҫләрһегеҙ, әммә һуң булыр!

**Айыу:** Беҙ сығарған закондар кире ҡөскә эйә түгел!

***Төлкөбикәне күмәкләп ҡыуып сығаралар. Уның артынан Утбикә лә эйәрә. Шул саҡ дәртле баҫып Ҡыш бабай килеп инә.***

**Ҡыш бабай:** Һаумыһығыҙ ҡәҙерле балалар, йәнлектәр, хөрмәтле уҡытыусылар һәм ата-әсәләр! Һаумы, Ҡарһылыу ҡыҙым!

**Нурбикә:** Һаумы, Ҡыш бабай олатай! Беҙҙең Яңы йыл байрамына рәхим ит!

**Ҡыш бабай:** Һеҙгә инеп килгәндә Төлкөбикә менән Утбикәне осраттым. Итәктәренә ут ҡапҡан кеүек сығып баралар. Мине күрмәнеләр ҙә хатта. Нимә булды һуң уларға?

**Айса Ғайса улы:** Улар беҙҙең байрамды мөрхәтһенмәй, ҡайҙалыр икенсе шыршы янына киттеләр, буғай...

**Айыу:** Һәр кемдең үҙ даланы, Ҡыш бабай ҡорҡаш!

**Ҡыш бабай:** Ниңә барығыҙ ҙа шымып ҡалдығыҙ? Ҡайҙа музыка? Ниңә йырламайһығыҙ? Ниңә бейемәйһегеҙ?

***Күңелле музыка ағыла. Барыһы ла шыршы тирәләй өйөрөлә, йырлай, бейей. Ҡыш бабай балаларға, йәнлектәргә бүләктәр тарата. Яңы йыл кисәһе дауам итә.***

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

✓ *Тимәк, эреләнмә, аяҡтарың ерҙә ныҡ баҫып торһон. Донъя - ҡуласа, әйләндереп килтереп бер баҫа. Көнө менән йәшәмәгеҙ. Бөгөн яҡшы икән, ғүмер буйы шулай булыр тип ымһынмағыҙ.*

ИНТЕРНЕТТАН



# БИЛ НЕСКӘЛЕГЕНЕҢ... үлсәмдәре күпме?

■ Британия ғалимдары билдәләүенсә, әгәр ҙә кешенең бил оҙонлоғо унын буйының яртыһынан ҙурыраҡ икән, диабет, метаболик синдром йәки йөрәк-ҡан тамырҙары сире менән ауырыу хәүефе арта. Сәләмәтлек өсөн билгә йыйылған май - иң ҡурҡынысы, ти улар. Тикшеренеү барышында бил/буй араһындағы айырма тән массаһының индексына (ИМТ) ҡарағанда ла мөһимерәк булыуы асыҡланған. Тән массаһының индексы ауырлыҡ (кг)/ (буй оҙонлоғо (м))2 формулаһы буйынса һанала, әммә унда май һәм мускулдар нисбәте иҫәпкә алынмай. Сер түгел, был күрһәткестәргә хәүефтең күп факторҙары һәм дауалау үҙенсәлектәре бәйләнгән. Бил үлсәме кәүҙәнең буй үлсәменең яртыһына тура килергә тейеш, был норма булып тора.

■ Баҡтиһәң, һәр тойғоноң үҙенең оҙайлығы бар икән. Һағыш - иң "оҙон" тойғо иҫәпләнә, кеше туҡтамайынса көнө буйы һағышҡа бирелә ала. Оялыу, ҡурҡыу, аптырау, күңелһеҙләнеү, ярһыу, күрә алмау кеүек хистәр оҙаҡҡа һуҙылмай, улар һағышҡа ҡарағанда 240 тапҡырға ҡыҫҡағыраҡ. Бының тап ошолай булыуы яҡшыраҡ та, ти белгестәр. Мәҫәлән, һеҙгә күңелһеҙ булғанда ваҡыт бик яй үткән кеүек булһа ла, был улай түгел. Оялыу - ғәйеп тойғоһона, ҡурҡыу хәүефләнеүгә ҡарағанда ҡыҫҡараҡ. Кеше үҙе өсөн мөһим булмаған ваҡиғаларҙы тиҙерәк онота. Бары тик ныҡ ҡәҙерле осраҡтар ғына баш мейеһендә һәм йөрәктә оҙағыраҡ һаҡлана икән.

■ Бесәйҙәрҙең организмында осраған Toxoplasma gondii паразитының кешегә әллә ни ҡурҡынысы булмаһа ла, ауырлы ҡатындар һәм иммунитеты түбән булған кешеләр унан һаҡланырға тейеш, ти белгестәр. Был паразит кеше организмында ғына түгел, тупраҡта ла, бешеп етмәгән иттә лә үҙен яҡшы тоя. Һуңғы асыштар күрһәтеүенсә, токсоплазма шизофрения менән дә бәйле. Паразит баш мейеһенә үтеп инеп, унда үрсей башлай. Башта кеше бер нәмә лә тоймай. Һуңғараҡ баш ауыртыуы башлана, кеше үҙен аңлайышһыҙ тота. Шулай ҙа был һирәк осраған күренеш, ғалимдар аныҡлауынса, Ер йөҙөндәге халыҡтың өстән бер өлөшөндә был паразиттар бар һәм улар сәләмәтлеккә зыян килтермәй.

■ Сәс сәләмәтлеге өсөн яуап биреүсе аҡһымдар - керотиндар теш эмале менән тығыҙ бәйле. Ҡайһы бер кешеләрҙә генетик кимәлдә кератиндың әүҙемлеге түбән була. Был сәстәрҙең генә түгел, тештәрҙең торошона йоғонто яһай. Теш эмале кеше организмындағы иң ҡаты матдәләрҙең береһе, ә унын ныҡлығын кератин һаҡлай. Шуға ла был алыштырғыһыҙ аҡһымдың үҙ көсөн юғалтыуы эмалдең насарайыуына, кариесҡа алып килә.

■ Диетологтар лимонды организмды таҙартыусы иң яҡшы сара тип һанай. Ул организмдан шлактарҙы ҡыуа, махсус диета тотҡанда һәм физик күнекмәләр яһағанда был цитруслы үҫемлек артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итә. Бынан тыш, лимонда иммун системаһын нығытыусы, аллергия, туберкулез, ревматизм мәлендә хәлде яҡшыртыусы С витамины күп. Диетологтар лимондың ҡабығын да ашарға тәҡдим итә, сөнки унын составындағы пектин асығыу тойғоһон бер нисә сәғәткә баҫа.

АҢДАН - ҠАНҒА, ҠАНДАН - ЗАҢҒА

# АТА БАЛАҺЫ

**Хәйбулла районының урманлы тауҙарға һыйынып һына ултырған Һаҡмар Наҙарғоло ауылында йәшәүсе Ҡаҙаҡбаевтар ғаиләһендә ҡайындай зифа буйлы бер ҡыҙ, ҡарағайҙай һомғол биш егет буй еткергән. Бөгөнгө көндә уларҙың һәр береһе үҙҙәре ҡайны-ҡәйнә, бейем булып, күптәре өләсәй, ҡартатай булған. Әммә улар ҡайҙа ғына эшләмәһен, кем менән генә ғаилә ҡормаһын - ғаилә башлығы Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевтың ҡарт ҡартатаһы Ейәнғолдоң тәрбиә ҡанундарынан тайпылмаған. Мөхәмәтйән ағай бөгөнгө көндә - туҡһан йәшен тултырған мәлдәрҙә үҙенең иң оло бәхете итеп һанай ошо төп талапты үтәй алыуын. Унын һөйләгәндәрен тыңлап үтәйек әле.**



Күпте, бик күпте күрҙем, төрләһөн үткәрҙем башымдан. Әммә ҡарт ҡартатайым юлынан аҙ ғына ла тайпылманым. Ул миңә изгелекле бул, һоранма, һауаланма тигән өс васыят әйтте. Ошо васыят Кеше булып йәшәүҙең, "Яҡшы кеше булығыҙ", тип, "Урал батыр" эпосы аша халыҡ әйткәненең төп өс нигеҙелер, тип уйлайым. Беҙ ошо васыяттарҙан тайпылмаҫҡа тырыштыҡ.

**Изгелекле бул,** тигәне бик оло мәғәнәле һүҙ бит. Кешегә изгелек күрһәтәм, тиһәң, ҡул ярҙамы күрһәтә алмаһаң, һис юғы, тел ярҙамы күрһәтергә кәрәк. Әсәйем берәй аҡыл бирер булһа, фәһемле генә ваҡиға һөйләп алыр ине. Ҡыҙыҡлы теге ваҡиға ла иҫтә ҡала, биргән аҡылы ла зиһенгә һеңә. Бына бит боронғолар ҡалайыраҡ биргән тәрбиә һабаҡтарын. Мин дә үҙ башымдан үткән бер хәлде һөйләп, әйткәнемде нығытып ҡуяйым. Мине урам малайҙары "кулак балаһы" тип йәберләй ине. Бер һүҙҙән йәберләгәс, "кулак" тигән һүҙ бик насар кешегә тағыламы икән, тип, эстән һыҙам бит инде. Атайым тураһында бер генә лә насар уйлағы килмәй. Бер көн шулай бер ағай малайҙарҙың мыҫҡыллағанын ишетеп: "Теймәгеҙ уға. Ата балаһы бит ул," - тине лә, башымдан һыйпап үтте. Һиҙҙермәһәм дә, күҙгә йәш төйөлдө. Ошо ябай ғына, әммә бик мәғәнәле һүҙҙәр минең булмышымды үҙгәртте лә ҡуйҙы. Ата балаһы... Тимәк, атайым насар кеше булмаған. Тимәк, мин дә атайыма оҡшағанмын. Артабан да унын һымаҡ булырға тейешмен. Бына бит ул һүҙҙең көсө ниндәй! Шунан һуң яурындар яҙылып, күкрәк кирелеп, баш юғары күтәрелеп китте. Атлауҙарым икенселәнде. Кәүҙә турайҙы, аҙымдарым киңәйҙе. Ана шул ағайҙың балаларына ғүмер буйы ҡулдан килгәнсә ярҙам итергә тырышам.

**Һоранма, тигәне лә иҫ киткес шәп кәңәш.** Ниндәй генә ауыр хәлдәрҙә ҡалған саҡтарҙа ла һоранманыҡ. Һары таңдан ҡара төнгә тиклем эшләнек, һораныу кимәленә төшмәнек. Ҡырмыҫҡа иләүе кеүек була торғайны ғаиләбеҙ. Һыуҙан селбәрәләр һөҙөп ашаған саҡтар ҙа булды. Ишегебеҙ алдын ҡола ялан ҡалдырып, йәмкәбеҙгә тиклем алып сығып киттеләр, атайым менән әсәйемде Себер һөргән саҡта. Һоранманыҡ. Бер балам да эштән ҡурҡманы. Һораныу кимәленә төшөү ялҡаулыҡтан, уйлай белмәгәнлектән бит ул. Мейене эшләтмәһәң, тунбашҡа әйләнәһең. Уйланыҡ, тамаҡ аҫырар әмәл таптыҡ. Китапта яҙылған ул барыһы ла.

**Һауаланма тигәне лә һәр саҡ иҫтә булды.** Маҡтанып әйтмәйем, ғорурланып әйтәм: эшсәнлегебеҙ арҡаһында беҙ башҡаларҙан һәр ваҡыт бер аҙымға алдараҡ атланыҡ. Әммә Ейәнғол уҙамандың һүҙҙәре ҡолаҡ төбөндә торҙо: һауаланма. Тимәк, эреләнмә, аяҡтарың ерҙә ныҡ баҫып торһон. Донъя - ҡуласа, әйләндереп килтереп бер баҫа. Көнө менән йәшәмәгеҙ. Бөгөн яҡшы икән, ғүмер буйы шулай булыр тип ымһынмағыҙ. Ямантел булмағыҙ. Кешегә рәнйемәгеҙ. Хоҙай үҙе туралай ул, ти ине әсәйем дә.

Ошо васыяттарға тоғро йәшәнем. Быуындан-быуынға килгән аҡыл бит ул. Балаларымды ла, ейәндәремде лә шулай тәрбиәләргә тырыштыҡ. Әсәләре Бибиһан менән бер һүҙле булдыҡ. Бибиһаным минең әсәйемде яратты, балаларыбыҙ әсәйем Шәмсибаһар тәрбиәһендә үҫте. Бибиһан көнө-төнө эштә булды. Әсәйем тәрбиәһе әле телгә алған Ейәнғол ҡарт ҡартатайымдан килһә, ҡарт ҡартатайым үҙенә саҡлы йәшәгән уҙамандар аҡылын туплағандыр. Борон бит тәрбиә ҡанундары китапта яҙылмаһа ла, шулай быуын-быуындан күсә килгән.

Башҡортта бик матур тәрбиә ғәҙәте бар бит. Быны мин әсәйемдә күрҙем. Бер ваҡытта ла тегеләйт, былайт, тип туранан-тура аҡыл өйрәтмәне. Йә шиғыр, йә мәҡәл менән әйтеп кенә сәпкә тейҙерә ине. Шунан борон "ҡарттар әйткәне" тигән бик мәғәнәле һүҙ бар ине халыҡ телендә. Шул һүҙ үҙе лә, төшөнсәһе лә юғала бара. Әсәйем балаларҙы ана шул "өлкәндәр әйткәне" буйынса тәрбиәләне. Өлкәндәр әйткәненә Аҡмулла, Бабич шиғырҙары ла, Ризаитдин нәсихәттәре лә, мөнәжәттәр ҙә инеп китә торғайны. Хатта ауырып киткәндәр мөрәжәғәт итһә, "Китап ни әйтә икән?" тип, "Тип китабы" тигән бер ҡалын китабын аса һалып ҡарай торғайны. Моғайын, Тибет медицинаһы буйынса яҙылған китап булғандыр уныһы. Ниндәй телдә яҙылды ла, әсәйем ниндәй телдә уҡыны икән? Донъялар үҙгәреп киткәс: "Мин уҡыған китаптарҙың ҡәҙере ҡалманы, туҙрап-тапалып ятмаһын, үлгәс, баш осома һалығыҙ", -тигәйне. Шулай иттек. "Йософ менән Зөләйха"ны ла уҡый торғайны. "Буҙъегет" тигәне лә бар ине. Теге замандарҙа, боронғолоҡто юҡҡа сығарған йылдарҙа, боронғо китаптарҙың береһен дә ҡалдырмай утҡа ырғыттылар бит... Шуға үҙе менән күмдерткәндер инде... Әсәйем - ғәжәп аҡыллы, белемле кеше булды. Ул өләсәйем яғынан да, ҡартатайым яғынан да килгән аҡылды туплаған, үҙ зиһене яҡтылығын ҡушып нурландырған ғилеме менән йәшәне. Бына хәҙер унын заманы килде лә бит...

Боронғо китаптарҙы юҡҡа сығарған заман, тигәндән, бер сер ҙә асайым әле. Мин өлкәндәр өйрәткәнде ятҡа бикләй барҙым. Онотолоп ҡуймаһын, тип, яттан һөйләй ҙә йөрөй торғайным. Шулайтып, хәтергә күнекмә яһалғандыр, тип уйлайым. Бик күп нәмә һаҡлана хәтерем һандығында. Байтаҡ рухи ҡиммәттәр алып ҡалынды. Эй-й-й, булды бит заманалар. Замана, тип, кеше булдыра инде заманаһы. Замана үҙенән үҙе бар булып, кешене булдырмай. Хатта бер ваҡыт ҡурай уйнау бөттө, бынамын тигән оҙон көйҙәребеҙҙе лә һанламай башланылар бит. Миңә утыҙ алты йәштәр ине. Өфөнән радионан килгәндәр, барып яҙыл, тип ебәрҙеләр. Тауыш шаңғырлап торған саҡ. Тын оҙон. Хатта ҡайһы бер ҡурайсылар эйәрә алмай торғайны. Дәртләнеп барҙым. "Әрме" менән "Тәфтиләү"ҙе йырлап ебәрҙем. Өфөнән килгәндәр араһынан бер ҡатын: "Ниңә кәрәк был мәжлес йырҙары? Берәй ҡыҫҡараҡ йыр белмәйһеңме?" - ти. Башыма шаңҡыта һуҡҡандай булды. "Беләм", тинем дә "Зимагорҙар" көйөнә һалып, ваҡ-төйәк таҡмаҡтар әйтә башлағайным, теге ҡатынға оҡшап китте бит был. Ҡушылып та китә, тыпырлап та ала. Ә мин унын һайын йырлайым:

*Сит ерҙәрҙә вафат булһам,*
*Ҡәберем тәрән ҡаҙығыҙ.*
*Баш осома таштар ҡуйып,*
*Комсомол, тип яҙығыҙ.*

*РСФСР тип яҙылған*
*Ҡыҙыл флагтарына.*

*Совет власын бирмәбеҙ*
*Ауыл кулактарына.*

*Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа*
*Түбә ҡалайҙарына.*
*Беҙҙең арала урын юҡ*
*Кулак малайҙарына.*

*Буржуй-ишәк ҡайҙан алдың*
*Ҡара тимер санаҙы?*
*Ҡыҙыл ғәскәр ҡаршы килгәс,*
*Белдеңме инде самаҙы?*

Теге ҡатын мине маҡтай башланы. "Ниндәй йыр был?" ти. Асыуҙы саҡ тыйып торам. "Буржуй-ишәк" тинем тегегә. Исем-шәрифтәремде һорай. Өфөгә барыусылар исемлегенә яҙып ҡуйҙы. Барманым. Берҙән, ғүмер буйы "кулак малайы" тип хурланылар. Үҙемдән үҙем көләйемме? Икенсенән, күңелемә иң яҡын оҙон көйҙәремде хурлатып, ыбыр-сыбыр таҡмаҡ әйтергә тип, Өфөгә китеп барайыммы? Барманым.

"Кулак малайы" тигәндән... Кем ул кулак? Етеш йәшәгән, үҙ ҡул көсө менән мал тапҡан, баштары эшләгән, эш рәте белгән кешеләр ине бит улар.

Ейәнғол ҡарт ҡартатайым Ҡотлогилдегә байтаҡ мал ҡалдырған. Ҡартатайым Ҡотлогилде уны тағы ишәйткән. Һуғарырға төшкән саҡта көтөүҙең башы йылғала булһа, артҡағылары һарайҙан сыға торған булған. Ялсылары булманы. Үҙҙәре эшләнә. Хеҙмәт яраттылар. Етеш йәшәнек. Утыҙынсы йылдарҙа ишек алдыбыҙ ҡола яланға әйләнде. Бер келәт кенә тороп ҡалды. Унының нисек һүтеп алмағандарҙыр. Әле шул йылдарҙан ҡалған ҡомартҡы ул. Икәү генә тороп ҡалғанбыҙ. Мин Ҡаҙаҡбаевтарҙың нәҫел сылбырын өҙмәҫ өсөн тере ҡалғанмындар. Ҡартатайым Ҡотлогилде кулактан тартып алған әйберҙәр исемлеге бар. Хәҙерге байҙар менән сағыштырһаң, көлкө инде.

Ҡартатай-ҡәрсәйемдәргә әле ҡаптырайым. Бөлә яҙып, бөлә яҙып, үҙ тырышлыҡтары менән тағы бауыр ҡалҡытып, хәлләнеп, етеш тормош ҡороп алалар ҙа, үҙҙәрен бөлгөнлөккә төшөргәндәрҙең балалары килһә, ашарға бирәләр. Мин аптырап: "Һуң, уларҙың аталары беҙҙе таланы бит, бирмә уларға", - тип әсенһәм: "Балам, Хоҙай уларҙыҡын күрһәтмәһен, биргән менән бөтмәй, кешегә ашатҡандан кеше бөлмәй, Хоҙай әмеренән ҡалдырмай ул. Балам, яҡшы бул, яҡшыны яман кеше лә ярата", - ти торғайнылар.

Уҡымышлы булдылар. Әсәйем ун ике йәшендә "Мөхәммәҙиә"не уҡыған. Әсәйемдең атаһы Сәйетгәрәй Ғәлиәкбәров шиғыр, йыр ятатты. Үҙе халыҡ йырҙарын бик оҫта башҡара торғайны. "Белем кеҫәлә ятҡан аҡса менән бер. Кәрәк саҡта тотаһың да файҙаланаһың. Уҡыгыҙ, белем алығыҙ", - ти торғайны. Ошо һүҙҙәрҙе иҫтә тоттом. Балаларҙы уҡыттым. Һәр береһе зиһендәре еткәнсе уҡыны. Ун өс ейән-ейәнсәрем дә, ун ике бүлә-бүләсәрем дә Ҡаҙаҡбаевтарҙың исем-шәрифенә тап төшөрөрлөк түгел. Белем генә кешене кеше итмәй. Ғорурлыҡ, милли ғорурлыҡ та кәрәк кешегә."Ауылда икенсе холҡло килмешәктәр күбәйә башланы. Ауыл тәртибен боҙалар. Сит-ят йөгөнтөһонан ҡурсалап алып ҡалырға тырышығыҙ балаларҙы. Башҡорт улай булмаған, тип, башҡортлоҡтарына баҫым яһағыҙ. Телдән айырмағыҙ. Телдән айырмаһағыҙ, өлкәндәр һүҙенә ҡолаҡ һалырҙар", - ти торғайны әсәйем. Һәр һүҙен сүпләп ултырып китап итеп кенә баҫтырырлыҡ аҡыл бар ине әсәйемдә. "Милләт ғорурлығы булмаған кешенең бар уй-фиғеле ашап-эсеүҙән ары китмәҫ. Әҙәп тигәне лә самалы ғына булыр. Китапһыҙ йәшәмәгеҙ. Боронғоно онотмағыҙ. Халыҡтың быуын сылбыры өҙөлһә, ҡалған ягы хайуанға әйләнә", - тигәне ҡолаҡ төбөмдә генә минең. Шуға халҡыбыҙҙың анау тиклем рухи ҡиммәттәрен һаҡлау өсөн ҡайҙа нимә ишетәм - отоп алып, ҡабатлап, зиһенгә һала барырға тырыштым. Йырҙарымды Юлай Ғәйнетдинов та, япондар ҙа байтаҡ яҙып алды. Борондан килгән һабаҡтарҙы ошолай урыҡ-нуруҡ булһа ла һөйләй-өйрәтә барҙым. Әле бына балаларым китап итеп сығарышты. Аҡ ҡағыҙға төшкәне юғалмаҫ, тип ышаныс килә.

Әлек халыҡты халыҡ тәрбиәләне. Ауылда бер генә тәртипһеҙлек тә ололарҙың күҙ уңынан ысҡынманы. Берәй тәртипһеҙлек күреп ҡалһалар: "Кем балаһы әле һин? Ни эшләп улай яман эш ҡылаһың? Бынамын тигән тоҡомондо ҡоротаһың бит, ҡыу малай! Нәҫелеңдә бер яман кеше лә булманы. Яман бала атаинәһен һүктерә, тап төшөрмә атайәсәйең намыҫына", - тип, ҡайталатып ебәрерҙәр ине. Ауылда яманаты сығырлыҡ хәл булһа, мәсеттә лә телгә алыныр ине. Хәҙер бөтөн бара бит шул матур ғәҙәт. Әллә ни һәр кем үҙенсә йәшәп алды ла китте. Улай тырым-тырағай булһаҡ, алда ни көтәлер беҙҙе - әйтеүе ауыр. Боронғолар әйткәнен онотмаҫҡа кәрәк ине йәштәргә. Үҙебеҙ булып йәшәүгә ни етә! Шөкөр, беҙҙең Наҙарғолда боронғоса тәртип һаҡлана әле.

Быйыл 90 йәшем тулды. Ғүмер һиҙҙермәй генә алға шыла шул.Ошо йәшемә тиклем кешеләргә кәрәк булыуым оло бәхет. Саҡырып торалар, килеп хәл беләләр. Кешегә кәрәк булып йәшәүемә хатта ҡыуанам мин. Бәхетлемен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быуындар сылбыры өҙөлһә, ҡалған ягы хайуанға әйләнә, тип, ниндәй оло фәлсәфәүи аҡыл ҡалдырғандар. Ошо хәҡиҡәтте тәрән аңлаған Мөхәмәтйән Абдулла улы Ҡаҙаҡбаев уҙаман быуындар сылбырын өҙмәү өсөн бар ғүмерен арнаған. Иҫ китмәле рухи ҡомартҡы һаҡлап алып ҡалған киләһе быуындарға. Халҡыбыҙ шундай уҙамандарыбыҙ булыуы менән даланлы ла инде.**

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ




## Ни өсөн яуызлыҡҡа юл ҡуйыла?

- Һин, Алла камил, шәфҡәтле, йомарт һәм Ул донъялағы бөтөн нәмәләрҙе барлыҡҡа килтергән, тип раҫлайһың. Алла яҡшы, барыһын да яратыусы булғас, ни өсөн Ул яуызлыҡты барлыҡҡа килтергән? - тип дуҫым һөжүмен дауам итте.

Дуҫым ҡуҙғатҡан проблема, ысынлап та, философияла иң бәхәсле мәсьәләләрҙең береһе, һәм уның буйынса фекерҙәр күп төрлө. Мин уға үҙ фекерҙәремде әйттем:

- Алла, ысынлап та, шәфҡәтле, мәрхәмәтле, Ул бер ваҡытта ла насарҙы эшләргә ҡушмай, ләкин Ул аҡыллылыҡ өсөн яуызлыҡҡа юл ҡуя. Ҡөрьәндә әйтелгәнсә: "Ысынында Алла әшәкелек эшләргә бойормай. Үҙең белмәгәнде Аллаға һылтамаҡһың бит. Аллаһы Тәғәлә ғәҙеллек бойора".

Алла тик ғәҙеллек, һөйөү, яҡшылыҡ менән генә эш итә, һәм Ул яҡшы эштән генә ҡәнәғәт ҡала.

Ләкин ни өсөн Алла залимды, кеше үлтереүсене, бурҙы язаһыҙ ҡалдыра? Сөнки Алла беҙҙең ирекле булыуыбыҙҙы теләй. Әгәр беҙҙең дөрөҫлөк менән ялған, буйһоноусанлыҡ менән гонаһ эшләү араһында һайлау хоҡуғыбыҙ булмаһа, азатлыҡтың бер ниндәй мәғәнәһе булмаясаҡ.

Асылда, Хоҙай барыбыҙҙы ла яҡшы һәм буйһоноусан итә ала, ләкин бының өсөн Ул беҙҙең азатлығыбыҙҙы тартып алырға тейеш.

Хаҡ Тәғәлә ҡағиҙәләрендә, азатлыҡ, ни тиклем әсе булмаһын, бәхетле ҡоллоҡтан яҡшыраҡ, тиелә. Шуға күрә Алла беҙҙе хаталаныусан, сирле һәм өйрәнеүсе итеп ҡалдырған - был яуызлыҡҡа юл ҡуйған тәрән аҡыл.

Шул уҡ ваҡытта, төптән уйлап ҡараһаң, яҡшылыҡ - ул нигеҙ, ә яуызлыҡ - ул иҫкәртеү. Беҙ ғүмеребеҙҙең күп өлөшөн һау-сәләмәт булып үткәрәбеҙ, ә бер аҙ ғына ваҡыт сирләп алабыҙ. Ер тетрәү ҙә миллиондарса йыл йәшәгән Ер шары тормошонда бер нисә минут ҡына һуҙыла. Һуғыштар ҙа - оҙаҡ йылдар тыныс тормош һуҙымында ҡыҫҡа ваҡытлы бәрелештәр.

Был күренештәрҙең һәр береһенең ыңғай яғы ла бар бит. Ауырыу түҙемлелек тыуҙыра. Ыҙалар рух ныҡлығын сыныҡтыра, сыҙамлылыҡты нығыта. Ер тетрәүҙәр - Ер шарының ҙур эске баҫымдан тын алыуы ул. Ул Ер ҡабығын ярылыуҙан һаҡлай һәм, ерҙе үҙ урынында тотоусы тартыу билбауы кеүек, тауҙарҙы үҙ урынына ҡайтара. Вулкан ер аҫтында йәшеренгән тоҡомдарҙы һәм байлыҡтарҙы урғытып сығара, ергә уңдырышлы ҡабыҡ кейҙерә. Һуғыш ваҡытында асыштар күберәк яһала: пенициллин, атом, реактив самолеттар - былар барыһы ла һуғыш осоронда барлыҡҡа килгән. Йылан ағыуынан ҡиммәтле дарыуҙар алалар, микробтарҙан сәсәккә ҡаршы прививка яһайҙар. Үлем булмаһа, хәҙер беҙ үҙ урыныбыҙҙы биләмәҫ инек. Донъялағы яуызлыҡ - портреттағы күләгә кеүек, уны яҡындан ҡараһаң, артыҡ һымаҡ тойола, ә алыҫҡа ҡуйып ҡараһаң, ул кәрәк кенә түгел, ә унһыҙ һүрәт матур булмаҫ ине, тигән һығымтаға киләһең. Ә ауырыуҙар? Әгәр сирләмәһәк, сәләмәтлектең ҡәҙерен белер инекме ни? Һаулыҡ - ул башыбыҙға кейҙерелгән таж, уны беҙ күрмәйбеҙ, ауырыған саҡта ғына баһалайбыҙ. Йәмһеҙлек булмаһа, һылыулыҡты танымаҫ инек! Тәбиғәт ҡазалары булмаһа, йәшәү матурлығын һиҙмәҫ инек.

Ысынында, ауырлыҡтар - ул беҙҙең өсөн һынау, беҙҙе тикшереү. Алла алдында беҙҙең мөһимлегебеҙ дәрәжәһен шуға ҡарап билдәләйҙәр.

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## "Аҡыл вирустары" менән идара итеү: аң өсөн көрәш

**Кешене аҡылһыҙ, ауырыу һәм ярлы итергә тырышыусы "көстәр" тураһында һөйләгәндә гәзиттәге шайтан, террорсылар һәм бола тыуҙырыусы коммунистарҙы күҙалламайым. Шулай уҡ ниндәйҙер йәшерен йәмғиәт тураһында ла уйламайым, Ерҙе мәңгелеккә ҡалдырып китергә теләп, серле ракетаның сираттағы рейсына урын да алып ҡалмайым. Мин бары тик һеҙҙе уратып алған ғаилә, мөхит, дини учреждениелар, хөкүмәт һәм киң мәғлүмәт саралары кеүек изге күңелле кешеләр, ойошма һәм институттар тураһында һөйләмәксемен.**

Сөнки тап улар ысын хәүеф тыуҙырыусылар. Әгәр һеҙ күпселек кеүек фекер йөрөтәһегеҙ икән, әлбиттә, барлыҡ кешеләр һәм йәмғиәт структуралары тормошоғоҙҙоң бер өлөшө булып тора һәм именлегегеҙ хаҡына хеҙмәт итә, тип уйлайһығыҙ. Ә тап уларҙың һеҙҙе аҡылһыҙ, ауырыу һәм ярлы итеүен аңламайһығыҙ.

Был, ғаилә ағзалары йәки дуҫтарығыҙ һеҙҙе яратмай, тигәнде аңлатмай. Киреһенсә, улар һеҙҙе бик ныҡ ярата. Һәм берәү ҙә аңлы рәүештә зыян килтерергә теләмәй. Ләкин барлыҡ ошо һәм мендәрсә башҡа кешеләрҙең һеҙгә зыян килтереүенә берәү ҙә ҡаршы төшмәй: никахығыҙ тарҡала, карьерағыҙ түбән тәгәрәй, сирләйһегеҙ йәки йәрәхәт алаһығыҙ, бизнесығыҙ алға бармай, организмды емереүсе матдәләр ҡулланаһығыҙ һәм тыуғандан алып сәләмәт, бәхетле булыу хоҡуғына ҡаршылыҡ тыуҙырған миллиондарса ғәмәл ҡылаһығыҙ. Минең әйткәндәрем, әлбиттә, һаташыу кеүек, әммә һеҙгә даими рәүештә үҙегеҙҙең бер кемгә лә кәрәкмәгәнлегегеҙҙе, байлыҡҡа һәм уңышҡа ҡарата ялған күҙаллауҙарығыҙҙы күңелегеҙгә һеңдереп, мейегеҙҙе шул тиклем яҡшы "йыуғандар", хатта үҙегеҙ ҙә аңламаҫтан үҙегеҙ-үҙегеҙгә дошманға әйләнгәнһегеҙ.

Быны сәбәбен табыу өсөн бала сағығыҙға - аң формалаша башлаған ваҡытҡа әйләнеп ҡайтып, төпкә аңдың нисек программалаһыуына дусар булыуын һәм шунан һуң ниндәй тәрән инаныуҙар тамыр йәйеүен күрергә, йәғни аңды ағыулаусы мемдарҙы - "аң вирустарын" тикшерергә кәрәк. Мемдар, компьютер вирустары кеүек, паразит булып тора һәм хужа иҫәбенә үрсей. Яңы музыкаль хит булһынмы ул, йәки "Яңы мебель һатып ал - шунда уҡ түләргә кәрәкмәй, ике йыл дауамында түләмәһәгеҙ ҙә була!", "Беҙҙең һыраны эсегеҙ - һәм һеҙ шәһүәтле һәм ылыҡтырғыс буласаҡһығыҙ!" һ.б. шундай бер зыянһыҙ күренгән саҡырыуҙар, электрон почтаға килгән "Ошо хатты барлыҡ белгән кешеләрегеҙгә таратығыҙ, һәм кем һеҙгә битараф түгел - яуап бирер" тигән һәм башҡа йөкмәткеле хаттар кешелә хис-тойғо реакцияһын тыуҙыра һәм ҡушылғанды тормошҡа ашырыуға этәрә. Кешенең хис-тойғоһо ни тиклем көслө, мем шул тиклем тиҙерәк тиражлана. Аҡса һәм уңыш өлкәһендә үҙ-ара бәйләнгән мемдарҙың тотош төркөмө бар.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 1 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.05 "Мужское/Женское".
17.00, 02.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Соблазн". 9-я и 10-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Измена". Сериал (18+).
03.00 Новости.
04.00 "В наше время".

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Пропавшая субмарина. Трагедия К-129" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+)
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". Детективный сериал. 1-я серия (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Красивая жизнь". Мелодраматический сериал. 1-3 серии (12+).
23.50 "Дежурный по стране".
00.50 "Улицы разбитых фонарей" (16+)
03.50 "Комната смеха".

## "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина" (6+)
15.00 Резеда Әминева. Концерт (6+)
20.00 "Тәмле" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы (12+)

## БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Новости недели (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15 Новости недели (16+).**
**12.00 Диспут-клуб "Пятый угол" (12+).**
**12.45, 02.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30 Новости.**
**13.45 "Крылья любви" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык" (12+).**
**14.45 "Живое село" (12+).**
**15.15 "Царь горы".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Борсаҡ".**
**16.30 Новости (на русск. яз.) (6+).**
**16.45 "КЛИО".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 04.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" - "Барыс" (Астана). Прямая трансляция.**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.00 "Время спорта" (6+).**
**23.30 "Дознание" (12+).**
**24.00 "Доверься мужчине". Худ. фильм. По окончании: Новости (16+).**
**02.30 К.Гольдони. "Кьоджинские перепалки". Спектакль (12+).**
**05.30 "Мелодии души" (12+).**
**06.15 "Орнамент".**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 2 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Соблазн" (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет".
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.15 "Мужское/Женское".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Соблазн". 11-я и 12-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.15 "Структура момента" (16+).
01.20 "Измена". Сериал (18+).
02.15, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
04.10 "Контрольная закупка" (12+).

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". "Последний поезд, последний вагон". 2-я серия (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Красивая жизнь". 4-6 серии (12+).
23.50 "Мертвые души. Дело Холостякова". Док. фильм (12+).
00.50 "Улицы разбитых фонарей" (16+)
